ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30-5 ғинуар - февраль (һыуығай - шаҡай)

2016

№5 (683)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бөрйәнден тағы бер мөғжизәһе**



6

**Толстойҙың башҡорттарҙа булғаны,**

бәйге ойоштороғаны



7

**Инанысторына тоғро сәсән,**



йәки рухи тәғлимәтсе Сафуан Яҡшығолов тураһында бер кәлимә

8-9

**Суска кизеүе...**

Үҙ аллы дауаланмағыҙ!



13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1 февралдән 31 мартҡа тиклем "Киске Өфө" гәзитенә 2016 йылдың икенсе яртыһы өсөн арзан хаҡҡа - 545 һум 76 тингә (индекс - 50665) яҙылыу иғлан ителә. Почтала абонемент йәшнигенә булғандар өсөн яҙылыу хаҡы - 517 һум 26 тин. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары гәзитебеҙгә 488 һум 22 тингә, почтала абонемент йәшниге булғандар 465 һум 42 тингә яҙыла ала. Бергә булайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Нисек уйлайһығыҙ: интернетһыҙ бер көн йәшәп буламы?

***Батыр ХАНОВ, программалаусы инженер:*** Үткән шәмбе-йәкшәмбе көндәре дуҫтар менән Белорет районына барып, тау шыуып ҡайттыҡ. Иҫ киткес тәбиғәт ҡосағында шул тиклем онотолаһың, телефонды ҡулға алып, тотоп та ҡараманым, ҡайҙа ятҡаны ла иҫкә төшмәгән. Тимәк, интернетһыҙ бер көн йәшәп алыуҙың бер ҡыйынлығы ла юҡ, был һәр кемдең үҙ ҡулында. Календарҙа ундай көн булдырыуҙы бик урынлы һәм файҙалы, тип иҫәпләйем, сөнки күптәрҙә, айырыуса йәштәрҙә интернетҡа бәйлелек барлыҡҡа килеүен танымайынса булмай. Өҫтәүенә, виртуаль бәйләнешкә инеү мөмкинлеге еңелләште: стационар компьютерҙағы бөтөн функциялар - сайттар, контакттар һ.б. хәҙер смартфондарға һәм планшеттарға күсте, ә ул һәр ваҡыт йәштәрҙең ҡул аҫтында, кеҫәһендә генә ята, шуға ла улар өйҙә лә, эштә лә, дәрестә лә, транспортта ла, хатта ашағанда ла интернетта ултыра. Ата-әсәләргә быңдай хәл оҡшап етмәй, әлбиттә, әммә тыйыуҙың тик кире һөҙөмтәләргә генә килтереүен беҙ яҡшы беләбеҙ. Һәр замандың үҙенә хас шундай күренештәре булып тора: ҡасан ғына әле беҙҙе телевизор, видеояҙмалар ҡарауҙан, видеомагнитофондар менән мауығыуҙан тыялар ине. Унан һуң компьютерҙар пәйҙә булып, уйындар менән мауыға башланыҡ. Ниһайәт, интернет барлыҡҡа килде һәм элекке мауығыуҙар бөтөнләй онотолдо. Мәҫәлән, хәҙер йәштәр араһында телевизор ҡараған кеше һирәктер: бөтөн нәмә - интернетта. Ошо әҙмә-әҙлелек мине шундай уйға этәрә: ҡасандыр бер заман интернет менән мауығыу ҙа үтәсәк, моғайын. Унда кеше, бәйлелеге арҡаһында, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә көнө-төнө ултырмаясаҡ, ә кәрәкле мәғлүмәт һәм эш өсөн генә файҙаланасаҡ. Ә инде әлеге хәлгә килгәндә, интернетты тыйыуҙың файҙаһы юҡ, минеңсә. Тыйылған емеш татлы була, тигәнде иҫкә төшөрөргә генә ҡала. Ә шулай ҙа берәйһен, әйтәйек, баланы, интернеттан айырып торорға ҡарар иткән икәнһегеҙ, уның өсөн шундай уҡ ҡыҙыҡлы булырлыҡ башҡа берәй шөғөл йә ял сараһы уйлап сығырыу мотлаҡ. Мәҫәлән, туғандар, дуҫтар менән осрашыу, тәбиғәткә сығыу, һырғалаҡ, тау саңғыһы, хоккей йә булмаһа балыҡҡа барыу. Быңдай тәнәфестән һуң кеше донъяға икенсе күҙлектән ҡарай башлай, әйләнә-тирәлә интернеттан башҡа ла ысынбарлыҡ барлығына төшөнә. Юғиһә, кеше виртуаль донъяла йәшәп, эргәһендә ниҙәр булып ятҡанын да белмәҫкә, ата-әсәһе, туғандары, дуҫтарын да онотоп китергә мөмкин. Шундай бер әйтем дә бар бит: "Интернет алыҫтағы кешеләрҙе бер-береһенә яҡынайта, ә яҡындағыларҙан алыҫлаштыра..."

(Дауамы 2-се биттә).

ИҒТИБАР!

## "СЕЛТӘР" БӘЙГЕҺЕНӘ САҠЫРАБЫҘ




2020 йылда Башҡортостанда тағы ла бер абруйлы мәҙәни сара - Бөтә донъя Фольклориадаһы үтәсәк. Ошо мәртәбәле сараға әҙерлек сиктәрендә Республика халыҡ ижады үҙәге ҡарамағындағы "Сәсәндәр үҙәге", Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы башҡорт ырыуҙарының милли кейемдәрен, традицион биҙәнеү әйберҙәрен тергеҙеү, был боронғо шөғөлдәребеҙҙе үҙләштергән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы дәртләндереү маҡсатында "Селтәр" (селтәрҙе ҡайһылыр төбәктә - һаҡал, ҡайһыһындалыр - алмиҙеү, хәситә, яға, түшелдерек, тиҙәр) бәйгеһе ойоштора. Уның положениеһы "Киске Өфө"нөң 4-се һанында, "Бәйләнештә" социаль селтәренең "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмөндә баҫылды, республика район-ҡалаларының мәҙәниәт бүлектәренә ебәрелде.
Ә был фотоһүрәттәге ағинәйҙәр - Әбйәлил районы Аҫҡар ауылының "Миләш" фольклор ансамбле ағзалары. Башҡорт халыҡ фольклор ансамбле исемен йөрөткән был коллектив ағзалары, күрәһегеҙ, ошо төбәк башҡорт ырыуҙарына хас милли кейем, селтәр һәм ҡашмауҙар кейгән.

12+

✓ *Йыл да төрлө майҙандарҙа катоктар асыла, бассейндар, спорт түңәрәктәре, турниктар ҡуйылған майҙансыҡтар күп. Ләкин был йүнәлештәр һаман күмәк хәрәкәткә әйләнеп китә алмай.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# СӘЛӘМӘТ ЙӘШӘҮ РӘҮЕШЕ...

## күмәк хәрәкәткә әйләнһен

***Тәлғәт ЗӨЛҠӘРНӘЙЕВ, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, медицина фәндәре докторы, профессор:*** Бөгөнгө көндә мине бик күп мәсьәләләр борсой, әммә тәү сиратта беҙҙең табиптар, ғалимдар араһында башҡорт телен яҡшы белгән милләттәштәр һирәк булыуы күңелде ҡыра. Үҙҙәре башҡорт булып та, туған телен белмәгән кешеләрҙе аҡларлыҡ сәбәптәр таба алмайым. Йәштәр араһында ла саф башҡортса һөйләшеүселәр һирәгәйә бара.

Ғөмүмән, мине балаларҙың, йәштәрҙең тәрбиә мәсьәләһе бик борсой. Сөнки бик тынысһыҙ һәм көсөргәнешле осорҙа йәшәйбеҙ, донъяла фажиғәле хәлдәр күп, һуғыш бара. Йәштәребеҙгә шул ваҡиғаларҙың еле ҡағылмаһын, тиһәк, беҙгә уларҙың тәрбиәһенә күберәк иғтибар бирергә кәрәк. Ғалимдар, спортсылар, билдәле кешеләр, дин әһелдәре халыҡ араһына сығып, үҙенең һүҙен ишеттерһен. Имамдарҙың доға уҡырға, намаҙға баҫырға өйрәткәнен беләм, ә халыҡ алдына сығып, йәштәргә өгөт-нәсихәт һөйләгәнен, ниндәйҙер тәрбиәүи һүҙҙәр әйткәнен һирәк ишетәм. Тормош иманлеге, тыныслыҡ, яҡшылыҡ менән яманлыҡты айыра белеү тураһында ла вәғәздәр һөйләй йөрөһә ине улар. Хәҙер бит мәғлүмәт тиҙ тарала, интернет селтәре, телевидение, радио һәм матбуғат аша кешеләргә бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ мөрәжәғәт итергә була. Арҙаҡлы шәхестәр Өфөлә генә түгел, республиканың төрлө төбәктәренә барып та халыҡ менән осрашыуҙар үткәрһен ине.

Һәр хәлдә, йәштәр менән бәйләнеште нығытырға кәрәк. Уларҙы фәнгә, спортҡа, айыҡ тормош алып барыуға ылыҡтырыу мөһим. Ошо юҫыҡта бик күп эштәр эшләнә һымаҡ, "Динамо", "Биатлон" кеүек спорт стадиондары төҙөлдө, йыл да төрлө майҙандарҙа катоктар асыла, бассейндар, спорт түңәрәктәре, турниктар ҡуйылған майҙансыҡтар күп. Ләкин был йүнәлештәр һаман күмәк хәрәкәткә әйләнеп китә алмай. Шуға күрә, сәләмәт тәндә - сәләмәт рух, тигән фекерҙе киң мәғлүмәт саралары аша пропагандалау кәрәк, тип уйлайым. Башҡортостандан сыҡҡан билдәле спортсылар күп, улар тураһында тапшырыуҙар төшөрөлһә, халыҡ туранан-тура үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙы бирә алһа, отошло булыр ине. Бөгөн дөрөҫ туҡланыу буйынса һорауҙар актуаль түгел, хәҙер араҡы һәм тәмәке ҡулланмау, спорт менән шөғөлләнеү көн үҙәгендә тора. Һәр беребеҙ мөмкин тиклем көс һалып, йәштәрҙең иғтибарын дөрөҫ йәшәү рәүешенә йәлеп итеп, дөрөҫ юҫыҡҡа йүнәлтеп ебәрә алһаҡ ҡына һөҙөмтәгә өлгәшә алырбыҙ.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Нисек уйлайһығыҙ: интернетһыҙ бер көн йәшәп буламы?*

**(Башы 1-се биттә).**



***Фәрит ИСКӘНДӘРОВ, пенсиялағы уҡытыусы:*** Хәтерем яңылышмаһа, яңыраҡ ҡына Интернет көнө билдәләнгәйне шикелле, әле бына ғинуарҙың һуңғы йәкшәмбеһе календарҙа "Интернетһыҙ бер көн" тип яҙып ҡуйылған. Бөгөн интернет, ысынлап та, тормошобоҙға шул тиклем ныҡ үтеп инде, хатта пенсиялағы әбей-бабайҙар ҙа уның менән ҡуллана башланы. Шуларҙың береһе - бына мин ағағыҙ булам. Тик улай тигәс тә, миңә ейәнем һымаҡ компьютер артында көн-төн ултырыуҙың кәрәге юҡ, әлбиттә. Иң тәүҙә яңылыҡтарҙы, һауа торошон, унан үҙемде ҡыҙыҡһындырған башҡа ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе ҡарап сығам һәм шуның менән минең виртуаль сәйәхәт тамам да була. Ә нимәгә унда көнө буйы, етмәһә, төнө буйы ла ултыралар - һис аңламайым. Өйҙә ошо ерлектә йыш ҡына тауыш та сыҡҡылап тора, сөнки нисек кенә тыйып ҡарамайыҡ, ейәнебеҙ магнитланған һымаҡ компьютерҙан айырыла алмай. Иртәгәһенә иртән йоҡонан тора алмай ята - шул да булдымы эш! Мин уның һаулығы өсөн ныҡ борсолам, умыртҡа бағанаһы кәкерәйеү, күреү һәләте насарайыу ихтималлығы бар бит. Ул әле үк бөкөрәйеберәк йөрөй, үҙе ябыҡ, клавишаға баҫа барып, бармаҡтары шүрәленеке кеүек булып үҫкән. Пианист йә скрипач булһа, ни әйтер инең... Ҡыҫҡаһы, балалар һәм йәштәр өсөн уларҙың психик торошона драма яһамай ғына интернетта ултырыу сәғәттәрен сикләү сараһы күрергә ине. Өйҙә интернетты сикләү "фажиғә" тыуҙыра икән (әсәһе компьютерҙа ултырыуҙы тыйған өсөн 10-12 йәштәрҙәге бер малайҙың ниндәй ғауға күтәреүен әлеге интернет видеояҙмаһын ҡарап, иҫем китте), уға дөйөм селтәрҙән адреслы идара итеү мөмкиндер, бәлки? Был аптырағандан бирелгән һорау ғына инде... Ә бына офистарҙа эш сәғәттәрендә интернетта ултырыусылар ойошмаға бик ҙур зыян килтерә икән, тип яҙалар. Был да яраған эш түгел.

***Гүзәл ЮЛҒОТЛИНА, БДПУ студенты:*** Студенттарҙы интернеттан айырыу мөмкин булмаған эш. Унан бер нисә сәғәт кенә айырылып торһаң да, ниҙер юҡһына башлайһың. Дөйөм ятаҡта йәшәгәс, атай-әсәй алыҫта, тикшереп, тыйып тороусы юҡ, көнө-төнө интернеттамын: "Бәйләнештә" ултырам, кино ҡарайым, ситтә уҡыған класташтарым менән скайп аша аралашам... Тик һеҙ мине бөтөнләй тәртипһеҙ икән был, тип уйлай күрмәгеҙ тағы, интернетты мин уҡыуымда ла әүҙем файҙаланам: реферат, курс эштәре өсөн әҙәбиәт һайлайым, материал туплайым, кәрәкле мәғлүмәттәр эҙләп табам - китапханаға барып, ваҡыт әрәм иткәнсе, бында бөтәһе лә ҡул аҫтында. Бүлмәләш ҡыҙыҡай мине шелтәләп ала-алыуын, шул интернетыңда ултырып ҡалырһың әле, егеттәр менән йөрө, тип. Тик уны фәҡәт егеттәр генә ҡыҙыҡһындара икән, миңә лә уның кеүек булырға тимәгән дә... Ә, ғөмүмән, "интернетһыҙ бер көн"гә ҡаршылығым юҡ, үҙем дә ҡайһы саҡ туғандарға ҡунаҡҡа йә концерт-театрға барғанда, ял итеп алам.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# АҠСА ЭШЛӘЙЕК!



**Иҡтисади көрсөк ҡапҡаға килеп ишек шаҡымаһа, төп эшемдән тыш тағы ла ниндәйҙер шөғөлгә тотоноу тураһында, бәлки, уйламаҫ та инем. Ләкин, берҙән, эш хаҡын кәметеүҙәре, икенсенән, уны ваҡытында бирмәүҙәре ҡыбырларға, өҫтәмә килем килтереүсе эшмәкәрлек эҙләргә мәжбүр итте.**

Тик тота килеп кенә нимәгә тотонорға - бер өлкәлә лә буш торған урын юҡ кеүек. Ләкин был тәү ҡарашҡа ғына шулай икән, теләгәндә, барып "төртөлөр" мөйөш табырға була. Эшҡыуарлыҡтың иң үҫешкән һәм иң тығыҙ өлкәһе аҙыҡ-түлек, аш-һыу менән эш итеүгә бәйле. Тамаҡты алдап булмай, тимәк, аҡсаның да күп өлөшө шул тарафҡа йүнәлтелә. Ошоно күҙ уңында тотоп, төрлө эслек менән бөйөрөктәр бешереп һатырға булдым. Әлбиттә, бөгөн магазинда йәнең теләгәненде һатып алырға була. Тик бөтә оҫталыҡты биреп, күңел йылыһын һалып, телде йоторлоҡ тәмле итеп бешерелгәндәре бик һирәк осрай.

Район үҙәгенең яңы биҫтәһендә йәшәйбеҙ. Өйгә яҡын ғына урынлашҡан аҙыҡ-түлек магазинының ҙур автомобиль юлында урынлашыуы һатып алыусыларға ҡытлыҡ тыуҙырмай. Шуға күрә, магазин хужаһы менән һөйләштем дә, картуф һәм кәбеҫтәнән эшләнгән бөйөрөктәремде шунда һатыуға һалдым. Беренсе көндә үк бөйөрөктәрҙең тиҙ арала һатылып бөтөүе миңә ышаныс өҫтәне. Килем әллә ни ҙур түгел, ләкин көндәлек сығымдар өсөн бик тә ярап ҡала. Картуфлы бөйөрөктө - 20, ә кәбеҫтәлеһен 15 һум менән магазинға ҡуям. Һатыусылар иһә 5-әр һум өҫтәп һата. Көнөнә ике төрлө эслек менән 20-шәр берәмек бөйөрөк бешерәм. Иртән эшкә киткәндә магазинға тапшырам, ә кисен ҡайтышлай аҡсаһын инеп алам. Шулай итеп, көн һайын 700 һум аҡса эшләйем.

Бөйөрөктәр өсөн ҡамырҙы иртән йәки төшкө ашҡа ҡайтҡанда баҫып китәм, ә кисен ҡыҙым менән "һә" тигәнсе бешереп тә алабыҙ. Бөйөрөктәрҙе артыҡ күп итеп эшләмәгәс, арытмай ҙа, ваҡытты ла күп алмай. Тәмлекәстәрҙең эслектәре өсөн ҡулланған картуф менән кәбеҫтәнең үҙебеҙҙеке булыуы сығымдарҙы кәметә. Ондо иһә күмәртәләп һатыу базаһынан алғас, арзанға төшә. Бына ошо минең икенсе "эш хаҡым". Тырышҡан кеше йүнен таба барыбер. Бары тик төшөнкөлөккә бирелмәҫкә, эштән ҡурҡмаҫҡа һәм тауарыңды тәҡдим иткәндә ҡыйыуыраҡ булырға кәрәк. Уңыштың бөтә сере шунда.

**Фәһимә АБДУЛЛИНА. Әбйәлил районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мәскәүҙә Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Халыҡ хужалығы һәм дәүләт хеҙмәте академияһы майҙансығында "Киң мәғлүмәт саралары сағылышындағы ҡала-2015" халыҡ-ара конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы уҙҙы. "Бөтә Өфө" телеканалы беренсе дәрәжә дипломдарға лайыҡ булды. Халыҡ-ара жюри республиканың баш ҡалаһын билдәләп үтте. Ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялаловҡа Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығын байрам итеүҙе әҙерләүгә өлөш индергән өсөн миҙал тапшырылды.

✓Өфөлә БРИКС илдәренең хеҙмәт һәм мәшғүллек министрҙарының осрашыуы уҙҙы. Ул Рәсәйҙең БРИКС-та рәйеслек итеү барышында ойошторолған һуңғы сараһы булды. Өфөлә БРИКС илдәрендәге хеҙмәт министрҙары декларацияға ҡул ҡуйҙы. Рәсәй, Бразилия, Һиндостан, Ҡытай Халыҡ Республикаһы һәм Көньяҡ Африка Республикаһындағы тармаҡ министрҙарының ике көнлөк осрашыуы ошо мөһим халыҡ-ара документты ҡабул итеү менән тамамланды. Артабан халыҡ-ара ойошмала рәйеслек итеү бурысы Һиндостанға тапшырылды.

✓Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһының генераль директоры Гай Райдер менән осрашты. Гай Райдер БРИКС илдәрендәге хеҙмәт һәм мәшғүллек министрҙарының осрашыуын юғары кимәлдә ойошторғандары өсөн республика Башлығына рәхмәт белдерҙе.

✓БР буйынса Роспотребнадзор идаралығы хәбәр итеүенсә, үтеп барған аҙнаның өс көнөндә Өфөлә киҙеү һәм ОРВИ менән ауырыусылар һаны ҡапыл артып киткән. Сирҙе иҫкәртеү маҡсатында Өфө ҡала округы хакимиәте ҡарары менән 29 ғинуарҙан 6 февралгә тиклем дөйөм белем биреү учреждениеларында дәрестәр туҡтатыла.

✓Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, былтыр 2014 йыл менән сағыштырғанда тыуыусылар һаны кәмегән, вафат булыусылар артҡан, шулай уҡ халыҡтың тәбиғи үҫеше һаҡланған. Дөйөм алғанда, тыуыусылар һаны үлеүселәр һанынан 9,4 процентҡа артҡан, былтыр тәбиғи үҫеш 5089 кеше тәшкил иткән. 2016 йылдың 1 ғинуарына Башҡортостанда 4 071 181 кеше йәшәй. Шуларҙың 2 515 280-е - ҡала, 1 555 901-е - ауыл халҡы. Былтыр республикала йәшәүселәр 403 кешегә күберәк булған.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# УРЫНДАРҘЫ АЛЫШТЫРЫУҘАН...

## сумма үҙгәрмәҫ

**Яңы йылды яҡшы кәйеф менән ҡаршыларға әҙерләнеп кенә йөрөгәндә, "БР Төбәк операторы" тигән ойошманан декабрь айы өсөн капремонтҡа… 4 мең 036 һум аҡса түләүҙе талап итеп, бер түгел, ике квитанция килеп төшмәһенме! Өҫтәүенә, 185 һум пени яҙғандар.**



Башҡа һуҡтылармы ни! Баҫып торған ергә ултыра төшөп, ҡағыҙҙарҙы ентекләберәк ҡарай башланым. Адрес минеке, ә бына фатир милексеһе тапҡырына ла, түләүсе кеше тапҡырына ла фамилияны түгел, ә эре хәрефтәр менән "неизвестный" тип яҙып ҡуйғандар. Тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китте: фатир милекселәре - ҡыҙым менән икебеҙ, был турала таныҡлыҡ документтары тәртиптә, Баш реестр раҫлап, ҡултамға ҡуйған, документтарҙың тейешле датаһы, номеры бар... Капремонтҡа ай һайын түләп барам, бурысым юҡ. Кем ул тағы "билдәһеҙ" кеше? Баҡтиһәң, "үтә тырыш" операторҙар йорттоң 10 йыл элекке документтарын соҡоп сығарып, мәғлүмәттәрҙе тикшереп-нитеп тормайынса, аҡса талап итеп, квитанция һалып ебәргән икән. Был ойошма шулай боғаҙҙан алып аҡса ҡайырып ҡына өйрәнгән, күрәһең, ә кеше донъяла бармы, юҡмы, уның исем-шәрифе нисек - уларға барыбер. Бына нисек күҙҙәре тона ҡайһы бер чиновниктарҙың аҡса тигәндә; ни ҡыланғандарын белмәйҙәр. Хәҙер хатта "билдәһеҙҙәр"ҙән дә түләү талап итә башланылар. Берәү урынына квитанцияны икешәр-өсәр ҡатлап ебәрәләр. Өлкән кешенең һаулыҡ яғы самалы: ҡан баҫымы күтәрелеп китте, һөҙөмтәлә табип ярҙамына мөрәжәғәт итергә тура килде. Ярай, Төбәк операторы хаталанған да икән, ти, тик барыбер минең протест хатына ойошманың генераль директоры урынбаҫары А. Шкляр әфәнде ҡул ҡуйған яуаптарында "Хата беҙҙә булған, ғәфү итегеҙ" тигән һүҙҙәре лә юҡ, исмаһам.

Яңы йыл алдынан бындай "ҡотлау" алыусылар байтаҡ булып сыҡты. "АиФ-Башҡортостан" гәзитенең ошо йылғы 2-се һанының 4-се битендә Өфөнән М.Еремеева тигән бер авторҙың шул уҡ әлеге "Төбәк операторы"нан 2015 йылдың 1 июненән алып капремонт өсөн түләүҙе талап иткән квитанциялар килеүе хаҡында хаты баҫылып сыҡты. Баҡтиһәң, Еремееванан уның фатиры социаль яллауҙа булған саҡтағы бурысты түләүҙе талап итәләр икән. Хат авторы ул саҡта фатир милексеһе булмаған, бурыс ул йәшәгән район хакимиәтенеке, тип аңлата ул. Уның хатына Өфө йорт комитеттары Советы рәйесе Зөһрә Хөснөтдинова аңлатма бирә һәм бындай осраҡтарҙа мәсьәләне тикшереүҙәрен һорап, БР Торлаҡ күҙәтеүе буйынса дәүләт комитетына һәм республика Прокуратураһына ғариза яҙырға кәңәш бирә.

Тағы бер мәсьәлә хаҡында. Гәзит уҡыусылар хәтерләһә, "Киске Өфө"нөң Яңы йылдан алдағы һандарының береһендә электр энергияһы өсөн, ОДН тигән нәмәне лә ҡушып, халыҡтан тейешле сумманан байтаҡҡа арттырып аҡса йыйыусы "ЭСКБ" тигән ойошма хаҡында мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. Был юҫыҡта барған бәхәстәр Өфөнөң бер нисә район судында ҡараласағы хаҡында ла әйтелеп киткәйне. Яңыраҡ ошо хаҡта ҡыуанытлы хәбәр сыҡты: үткән йылдың 15 декабрендә БР Юғары Суды ОДН буйынса электр энергияһына түләтеүҙәр иҫәпләүҙе законһыҙ тип танығандан һуң, уны тыйып, милекселәргә элек түләнгән сумманы кире ҡайтарып биреү тураһында ҡарар сығарған. Тик артыҡ түләтелгән аҡса Торлаҡ күҙәтеүе дәүләт комитетына мөрәжәғәт иткәндәргә генә кире ҡайтарыла, тиелгән. Айырым йорттар буйынса шундай уҡ эштәр Өфө район судтарында ҡарала. Шуларҙың икәүһе торлаҡ милекселәре файҙаһына тамамланған да инде. 2016 йылдың 1 апреленән квитанцияларҙа ОДН тигән графа булмаясаҡ, тип вәғәҙә итһәләр ҙә, ул барыбер юҡҡа сыҡмаясаҡ, күрәһең: был пунктты "Содержание" тигән графа эсенә йәшерәсәктәр, тип туранан-тура яҙалар...

Мәктәптә математиканан "ҡушылыусыларҙың урындарын алмаштырыуҙан уларҙың суммаһы үҙгәрмәй" тип өйрәтәләр ине түгелме? Ниндәйҙер билдәһеҙ дәүмәлдәр эҙләп, баш ватҡансы, күҙгә күренеп торған аныҡ төшөнсәләрҙең урындарын бутап, "күҙ бәйләүе" анһатыраҡ та, аҡса ла яндарында ҡаласаҡ. Ә беҙ нисек түләгәнбеҙ, шулай түләргә лә түләргә тура киләсәк әле. 2016 йылдың 31 июненә тиклем. 1 июлдән торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн тариф республика буйынса 5,8 процентҡа сираттағы тапҡыр тағы ла артасаҡ - күңелегеҙҙе киң тотоғоҙ, йәмәғәт.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

УҠЫП СЫҠТЫМ...

# ТУҒАН ТЕЛДӘР ИҪӘБЕНӘМЕ?



**"Киске Өфө"нөң 4-се һанында "Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү ойошмаларында рус телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу концепцияһы" буйынса уҙғарылған диалогты уҡып, күңелемдә тыуған ҡайһы бер фекерҙәр менән уртаҡлашырға булдым.**

Минең бишенсе класҡа тиклем бер тере урыҫ та күргәнем булманы, мәктәптә бөтә предметтар ҙа башҡортса ине. Аҙаҡтан Инйәрҙең рус мәктәбенә күскәс, дәрестәр русса үтә башланы. Бер ай самаһы рус уҡытыусыларын аңлай алмай хитланғандан һуң, тиҙ үк арала улар телен аңлап, арыу ғына өлгәшеп алып киттем. Сөнки предметтарҙы уҡыу өсөн телде белеү мотлаҡ түгел, терминология физиканан да, математиканан да, химиянан да формулалар аша бирелә, ә уларҙы белеү буйынса рустар ҙа, башҡорттар ҙа, инглиздәр ҙә бер рәттә тора. Минең химик ағайым әйтергә яратыуынса, химияны өйрәнеү өсөн телде белергә кәрәкмәй, Америкала ла шул уҡ формулалар эшләй.

Ә бына рус теленән беҙҙе башҡорт ағайы, аҙаҡ апайы уҡытты! Шуға ла башҡорт класы тип аталған синыфтар уҡыусылары рус телен рустар уҡыған параллель тиҫтерҙәренән яҡшыраҡ белә торғайны. Быны бергәләп яҙған диктант, инша, олимпиада һөҙөмтәләре күрһәтә торғайны. Сөнки башҡорт телле уҡытыусы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, этимологияһын ғына түгел, уның башҡортса тәржемәһен дә аңлата, ана шунда һин ул һүҙҙең үҙенден ҡулланышындан тегеләргә күсеп киткәнлеген аңлайһың. Әле лә хәтеремдә: физика дәресендә "пренебречь" тигән һүҙҙе бик оҙаҡ аңлай алмай торҙом. Тәүләп ишеткән һүҙ, нишләтергә кәрәк һуң бында? Шунда уҡытыусы апай асыу менән татарсалап: "Уныһына күҙенде йоморға, иғтибар итмәҫкә кәрәк!" - тип ҡысҡырып ебәрмәһенме! Еп-еңел аңлашылды ла китте ҡатмарлы формула.

Рус теленең грамматикаһы, ысынлап та, ауыр ул. Мин, мәҫәлән, уны арыу уҡ яҡшы беләм тиһәм дә, әле лә аптыратҡан нәмәләр бар. Мәҫәлән, ни тигән "средний род" ул, уның менән ниҙе билдәләйҙәр? Инглиз телендә "род" төшөнсәһе бөтөнләй юҡ, башҡорт телендә лә. Яратҡан һорауым да бар: ни өсөн лошадь - белая, а конь - вороной? Икеһе лә йомшаҡлыҡ билдәһе менән яҙыла бит, икеһе лә ат. Бер грамматика ҡанунына буйһонорға, йәғни "женского рода" булырға тейеш түгелме? Ә "мама" менән "папа"?

Туған телдәр иҫәбенә рус телен өйрәтә башлау, әлбиттә, рустарға бер ниндәй өҫтөнлөк бирмәйәсәк. Улай булһа, саф рус өлкәләрендә рус теле буйынса өлгәш күпкә юғарыраҡ булыр ине. Был, әлеге лә баяғы, бәләнең сәбәбен ситтән эҙләү ул. Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын һәм әйтелешен йөҙәрләгән аңлайышһыҙ иҫкәрмәләре булған ҡағиҙәләр буйынса түгел, ә уның этимологияһын - килеп сығыу тарихын аңлатып өйрәтергә кәрәк кешегә. Шунда ғына ул яңылышмаясаҡ, тарихты ла белеп ҡаласаҡ. Мәҫәлән, рустар Торатауҙы Тратау тип яҙа. Уларҙан күреп, башҡорт балалары ла уны шулай яҙа. Ә бит уларға "Тора" , "Тау" һүҙҙәренең мәғәнәһен аңлатып, шуларҙан ҡушма һүҙ булып килеп сыҡҡан исемдең асылын өйрәтһәң, башҡа һүҙҙәрҙең дә тамыр-асылын күрергә күнегеп китерҙәр ине. Аҡ эт бәләһен ҡара эткә япһарыу үҙҙәренә бер файҙа бирмәһә лә, "ҡара эт" байтаҡ зыян күреүе ихтимал. Оҙаҡҡа бармаҫ был, тип уйлайыҡ - башҡорт теле үҙ ғүмерендә ниндәй генә ҡыҫымдарға дусар булманы, хатта яҙыу түгел, һөйләште лә тыйыу сигенә етелгәйне. Шуныһы ғына үкенесле - бер нисә ни рус, ни башҡорт булмаған быуын үҫеп сығып өлгөрҙө был хаталарҙы төҙәткәнсе...

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2016 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостандың ҡала яны пассажирҙар компанияһы поездарында студенттар һәм уҡыусылар өсөн льготалар ғәмәлдә. Был категорияға урта махсус уҡыу йорттарында, мәктәп-интернаттарҙа уҡыусылар ҡарай. Льгота 15 июнгә ҡәҙәр, һуңынан 1 сентябрҙән 31 декабргә тиклем ғәмәлдә буласаҡ. Документтар тултырғанда студент, уҡыусы билеттарын йәки мәктәптән белешмә ҡағыҙын тапшырырға кәрәк.

✓Саңғы спортын үҙ итеүселәр "Рәсәй саңғыһы-2016" Бөтә Рәсәй ярышына әҙерләнә. Өфөнөң Ленин районында ул 19 февралдә уҙа. Ярыштарҙа ҡатнашырға, көйәрмән булырға теләүселәр Затон биҫтәһендәге "Водник" стадионына бара ала. Ҡатнашыусыларҙы теркәү көндөҙгө сәғәт 2-лә башлана. Байрам сәғәт 3-тә асыла. Ярыштарҙа ҡатнашыу өсөн ғаризалар 17 февралгә тиклем Ленин районы хакимиәтенең физик культура һәм спорт буйынса комитетында ҡабул ителә. Адресы: М. Кәрим урамы, 19, 312-се бүлмә. Телефон: 229-04-47.

✓Ленинградты фашистарҙың блокадаһынан тулыһынса азат итеүгә 72 йыл тулды (1944 йыл). Иҫтәлекле дата уңайынан Өфөләге Еңеү паркында митинг ойоштоболдо. Ленинград янындағы алыштарҙа Башҡортостандан меңдәрсә яугир ҡатнаша, күптәре һәләк була. Йыл һайын республиканың эҙәрмән отрядтары Ленинград өлкәһенә экспедицияға бара, ошо һалдаттарҙың һөлдәләрен таба һәм кемдәрҙең медальоны йәки наградаһы һаҡланған, шуларҙың шәхесен асыҡлай.

✓Башҡортостанда хеҙмәт хаҡы мәсьәләләре буйынса бюджет учреждениелары һәм ойошмалары хеҙмәткәрҙәре өсөн "ҡыҙыу линия" асылды. Мөрәжәғәттәр (347) 218-06-57 (Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының хеҙмәт хаҡын түләү һәм йәшәү кимәле бүлеге) телефоны буйынса ҡабул ителә. "Ҡыҙыу линия" эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем эшләй. Тәнәфес көндөҙгө - 1-ҙән 2-гә тиклем.

✓Өфө дәүләт нефть техник университеты илдә терәк университеттар булдырыласаҡ тәүге 11 юғары уҡыу йорто исемлегенә инде. Нефть университетынан тыш, еңеүселәр иҫәбендә Кострома технология, Төмән нефть һәм газ, Себер аэрокосмос университеттары, Дон, Волгоград, Воронеж, Омск һәм Һамар техник университеттары, шулай уҡ Вятка дәүләт университеты һәм Тургенев исемендәге Орел университеты бар.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# УҠЫТЫУСЫЛАР...

## ең һыҙғанды

**Ошо көндәрҙә "Башҡортостандың баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы - 2016" XIX ҡала конкурсы һәм "Башҡортостандың баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2016" XII конкурсы үтә.**

Тәүге конкурста бөтәһе 66 педагог үҙ көсөн һынай. Жюри ағзаларына 13 төрлө предмет буйынса уҡытҡан белгестәрҙе баһаларға тура киләсәк. Өфө ҡалаһының иң алдынғы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы иһә, 22 конкурсант араһынан һайланасаҡ. Был мәртәбәле конкурстарҙа оҙаҡ йылдар балаларға белем биргән тәжрибәле педагогтар менән бер рәттән йәш белгестәр ҙә әүҙем ҡатнаша. Быйыл уларҙың профессиональ оҫталығы махсус булдырылған "Педагогик дебют" номинацияһында билдәләнәсәк, ә башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса уҡытҡан йәш белгестәр өсөн "Педагогик өмөт" номинацияһы биреләсәк. Ойоштороусылар әйтеүенсә, был тәжрибә тупларға һәм киләсәктә тағы ла юғары үрҙәргә артылырға теләгән маҡсатлы йәштәргә иғтибар йәлеп итергә, уларға һөнәри яҡтан үҫергә һәм белемдәрен камиллаштырырға ҙур ярҙам. Шулай уҡ конкурс шарттарында ла үҙгәреш бар, өсөнсө турҙың "Оҫталыҡ дәресе" һәм "Түңәрәк өҫтәл" этаптарына "Белем биреү проекты" тигән задание өҫтәлгән. Ҡатнашыусылар бер төрлөгә күнегеп, яраҡлашып һәм хатта ялҡып китмәһен, ярыш сәме һүнмәһен өсөн был бик мөһим. Ошо турала конкурстарҙы асыу тантанаһында Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов та һөйләне. "Йылдан-йыл конкурс үҫешә, уның программаһына үҙгәрештәр индерелә. Әммә конкурстың төп идеяһы һәм баш ҡаланың педагогик ресурс үҫенсәлекле булыуын аңлау һаҡлана килә. Хөрмәтле уҡытыусылар, һеҙ барығыҙ ҙа яңылыҡ индереүсе, тикшереүсе, сағыу шәхестәр. Был конкурс һеҙгә асыштарығыҙ, ҡаҙаныштарығыҙ тураһында белдереү һәм фекерҙәштәр табырға үҫенсәлекле мөмкинлек бирә. Ошо йәһәттән барығыҙға ла уңыштар теләйем", - тине ул.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

# УҢАЙЛЫ ХЕҘМӘТТӘН ФАЙҘАЛАН!




**Әйткәндәй, Өфөлә 9 Киң функциялы үҙәк эшләй. Улар Яңы күпер урамы, 8 (үҙәк офис), М. Ғәбәйҙуллин урамы, 6 (республикалағы иң ҙур үҙәк), Интернациональ урамы, 113, Менделеев урамы, 137 һәм 205а, СССР-ҙың 50 йыллығы урамы, 30/5, Б. Бикбай урамы, 44, Дағстан урамы, 2 адрестары буйынса урынлашҡан.**

**Башҡортостан Киң функциялы үҙәктәрҙе (КФҮ) үҫтереү йәһәтенән Мәскәү, Свердловск һәм Ростов өлкәләре менән бер рәттән, юғары күрһәткестәргә өлгәшеүсе территория иҫәбенә ингән.**

Баш ҡалала беренсе Киң функциялы үҙәк 2012 йылдың июнендә асылыуға ҡарамаҫтан, бигүк хәбәрҙар булмағанлыҡтан, халыҡ уның өҫтөнлөктәрен шунда уҡ баһалап еткермәй. Һеҙҙәмтәлә үҙәккә ни бары 32 мең генә кеше мөрәжәғәт итә. Яҡшы хәбәр тиҙ тарала, тигәндәй, 2013 йылда инде был һан 500 меңгә етеп, 2014 йылда миллион ярымғаса үҫә, ә былтыр иһә 2,5 миллион сиген үтеп китә.

Киң функциялы үҙәктәрҙең эш графигы төрлөсә, уларға үҙеңә уңайлы булған ваҡытты һайлап, эшкә тиклем, эштән һуң йәиһә ял көндәрендә мөрәжәғәт итергә мөмкин. Шулай уҡ ҡабул итеүгә алдан яҙылырға ла була.

Киң функциялы үҙәктәр, атамаһынан уҡ күренеүенсә, халыҡҡа киң хеҙмәт күрһәтә. Был, бер яҡтан, быҒаса күҙәтелгән һыу буйы сираттарҙың "койроғон" бер аҙ ҡыҫҡартыуға булышлыҡ итһә, икенсенән, бөгөнгө тиҙлек заманында ваҡытты бушҡа сарыфламай. Бында барлығы 200-ҙән ашыу, шул иҫәптән социаль пособиелар юллау, күсемһеҙ милеккә хоҡуҡ, РФ гражданины паспортын алыуға документтар тапшырыу, ИНН, СНИЛС һ.б документтар юллау хеҙмәте күрһәтелә. Дәүләт пошлинаһы түләүенән башҡа, Киң функциялы үҙәк хеҙмәте бушлай. Әлеге ваҡытта үҙәктең эшен анализлау, күсемһеҙ милеккә хоҡуҡ теркәтеү йәки уны һатыу-һатып алыу, паспорттар, башҡа документтар һәм балаларға пособиелар буйынса иң күп мөрәжәғәттәр килеүен күрһәтә. Йыл яңы ғына башланып тороуға ҡарамаҫтан, Башҡортостан буйынса йыл башынан алып үҙәктәр 2294-нән ашыу ғариза алып, 568, шул иҫәптән 513 - федераль, 53 - төбәк, 2 муниципаль хеҙмәт күрһәтеп өлгөргән дә инде. Бер көндә уртаса 25 самаһы кеше мөрәжәғәт иткән.

Федераль талаптар буйынса Рәсәйҙең барлыҡ субъекттары ла, уҙған йыл һуңында халыҡтың 90 проценты дәүләт һәм муниципаль хеҙмәт менән файҙаланыу мөмкинлегенә эйә булырға тейеш, тигән талап ҡуйһа, Башҡортостан был билдәне ашып атлап, 98 процентҡа еткерҙе. Яңы башланып торған йылда тәү сиратта күрһәтелгән хеҙмәттәрҙең сифатына етди иғтибар биреләсәк. Башҡортостан Республикаһының Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәт күрһәтеү киң функциялы үҙәге директоры Руслан Усманов белдереүенсә, быйыл барлыҡ үҙәктәр "Минең документтарым" тип аталған Дөйөм Рәсәй брендына күсәсәк. Уның маҡсаты - халыҡты хеҙмәтләндереү һәм мәғлүмәт биреү процесын ойоштороуға берҙәм системалы ҡараш булдырыу. Был үҙәктәрҙе бер төрлөгә әйләндереп, уларҙы барлыҡ халыҡҡа танылыулы итәсәк, йәғни биналарҙың эсе-тышы бер төрлө биҙәләсәк, документтарҙы тултырыу һәм мәғлүмәт материалдары ла бер үк стилдә буласаҡ. Шулай уҡ Өфөләге үҙәк базаһында "Бизнес өсөн Киң функциялы үҙәк" ойоштороу ниәте лә бар.

Был мәғлүмәт торлағын һаманғаса хосусилаштырмай һүҙып йөрөүселәр өсөн бик тә файҙалы булыр, моғайын. Сөнки 2007 йылда уҡ башланған хосусилаштырыу процесы бер нисә тапҡыр кисектерелә килеп, 2015 йылдың 28 февралендә Рәсәй Президенты торлаҡты бушлай хосусилаштырыу мөҙҙәтенең быйыл 1 мартҡа тамамланырға тейешлеге тураһындағы документҡа ҡул ҡуйғайны инде. Ләкин ошо көндәрҙә РФ Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев үткәргән кәңәшмәлә уны тағы бер йылға оҙайтырға ҡарар ителде. РФ төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалығы министры Михаил Мень белдереүенсә, бөгөнгә хосусилаштырылырға тейеш торлаҡтың 20 проценты милкселек хоҡуғын алмаған. Бушлай хосусилаштырыу ваҡытын оҙайтыу граждандар мәнфәғәтенән сығып башҡарыла, сөнки һуңынан хосусилаштырылмаған милекте һатып, бүләк итеп, залогҡа һалып, йәки мираҫҡа ҡалдырып булмаясаҡ.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЭШЛӘМӘҺӘҢ, ПЕНСИЯҢ ӨҪТӘЛӘ

**Эшләмәгән пенсионерҙарҙың страховкалы пенсияларын 2016 йылдың февраленән индексациялау күләме 4 процент тәшкил итәсәк. Дәүләт пенсия тәьминиәте буйынса түләнеүсе, шулай уҡ социаль пенсияларҙ, эшләү-эшләмәүенә ҡарамаҫтан, бөтөн пенсионерҙарға ла 2016 йылдың апреленән 4 процентҡа индексацияланасаҡ.**

2016 йылдың августында 2015 йылда эшләгән пенсионерҙарҙың страховкалы пенсиялары, ғариза яҙҙырмайынса иҫәпләү юлы менән 2015 йылғы пенсия балдарынан сығып, ләкин аҡсалата алғанда өс пенсия балынан да артыҡ булмаған күләмдә, арттырыласаҡ.

Пенсия закондарындағы үҙгәрештәргә ярашлы, эшләп йөрөүсе пенсионерҙар страховкалы пенсия һәм уға индексацияһыҙ тәғәйен түләү аласаҡ.

2016 йылдың 1 февраленән страховкалы пенсияларҙы индексациялау 2015 йылдың 30 сентябренә ҡарата хеҙмәт эшмәкәрлеге алып бармаған пенсионерҙарға ғына ҡағыла.

Үҙ көсөң менән булышҡан пенсионерҙар: шәхси эшҡыуарҙар, нотариустар, адвокаттар һ.б. эшләй тип иҫәпләнә, әгәр 2015 йылдың 30 сентябренә ҡарата улар Пенсия фондында иҫәптә торһа. Әгәр пенсионер 2015 йылдың 30 сентябренән һуң, атап әйткәндә, 2015 йылдың 1 октябренән 2016 йылдың 31 мартына тиклемге осорҙа хеҙмәт эшмәкәрлеген туҡтатһа, был турала ул Пенсия фондына хәбәр итә ала. Бының өсөн ул эшен туҡтатыуҙы раҫлаған документтарын күрһәтеп, Пенсия фондына ғариза яҙа. Шунан һуң ғына страховкалы пенсия уға индексация иҫәбен индереп түләнә башлай. Әгәр ҙә инде пенсионер ошонан һуң ҡабаттан эшкә урынлашһа, уның страховкалы пенсия күләме кәметелмәйәсәк.

Шулай итеп, Пенсия фондына ғаризаны хеҙмәт эшмәкәрлеген 2015 йылдың IV кварталында туҡтатҡан йәки уны 2016 йылдың тәүге кварталында туҡтатасаҡ пенсионерҙар ғына яҙа ала. Ул Пенсия фондының бөтөн төбәк органдарында һәм Киң функциялы үҙәктәрҙә ҡабул ителергә тейеш.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда Төркиәнән индереү тыйылған тауарҙарҙың һатылыуы тураһында "ҡыҙыу линия"ға хәбәр итергә мөмкин. Роспотребнадзорҙың республика идаралығына бушлай шылтыратыу өсөн телефон: 8-800-700-3-058. Ведомствоның матбуғат үҙәгендә әйтеүҙәренсә, "ҡыҙыу линия" дүшәмбенән йомаға тиклем иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 4-кә тиклем эшләй. Шулай уҡ эш ваҡытында яҙма мөрәжәғәттәр ҡабул ителә. Адресы: Өфө ҡалаһы, Р. Зорге урамы, 58. Электрон почта: rpnrb@02.rospotrebnadzor.ru.

✓Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы өлкәһендәге инвестиция проекттары Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы ойоштторған конкурстың һайлап алыу турын үтте. Федераль бюджеттан субсидия алыусылар исемлегенә "Алексеевка" совхозының 2,5 гектарлыҡ теплица комплексын төҙөү, крәҫтиән (фермер) хужалығы башлығы Фәүил Хәбибрахмановтың "Бүҙәк" теплица комплексының майҙанын 4,5 гектарға тиклем киңәйтеү һәм "Өфө селекция гибрид-үҙәге"нең саф токомло инә сускаларҙың заманса селекция-гибрид үҙәген файҙаланыуға тапшырыу буйынса проекттары ингән.

✓Башҡортостанда Белоруссия ауыл хужалығы техникаһының дилер үҙәген асырға ниәтләйҙәр. Өфөлә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Илдар Тимерғәлин "Гомсельмаш" асыҡ акционерҙар йәмғиәте вәкилдәре менән осрашты. Күҙалланыуынса, дилер үҙәге "Башсельхозтехника" дәүләт унитар ауыл хужалығы предприятиеһында асыласаҡ. Вице-премьер фекеренсә, был импортты алмаштырыу сиктәрендә республика аграрийҙарын техника менән тәьмин итергә, яңы эш урындары булдырырға, урындағы бюджетҡа һалымдар керемен арттырырға ярҙам итәсәк.

✓Башҡортостан халҡы ике сит ил паспорты алыуға хоҡуҡлы. Быға тиклем эше буйынса даими рәүештә сит илгә йөрөгән хеҙмәткәрҙәр генә ике документҡа эйә ине. Рәсәй Федераль миграция хеҙмәте идаралығының матбуғат үҙәгендә хәбәр итеүҙәренсә, яңы закон буйынса сит ил паспорты булған граждандарға биометрик паспорт та алырға мөмкин. Яңы документ ун йылға бирелә. Сит ил паспортын эшләү өсөн дәүләт пошлинаһы үҙгәрмәй.

✓Башстат мәғлүмәттәре буйынса, былтыр ғинуар-ноябрь айҙарында республикала уртаса айлыҡ хеҙмәт хаҡы 25 311,6 һум тәшкил иткән. Ошо осорҙа реаль эш хаҡы 2014 йылдың ғинуар-ноябрь айҙарына ҡарата - 90,1, Рәсәй буйынса 90,8 процент булған.

БАЛАЛАР ҺҮҘЕ

**Мин - ҡала башҡорто, Өфөлә башҡорт ғаиләһендә тыуғанмын, Мөхәмәт Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейында 11-се класта уҡыйым. Миңә ҡала башҡорттары, ҡала йәштәре проблемалары бик яҡын. Туған телемде яратып, хөрмәт итеп, 1-се кластан уҡ уның нескәлектәрен үҙләштерәм.**

# НИНДӘЙҺЕҢ ҺИН, ҠАЛА БАШҠОРТО?



Баш ҡалала йәшәүсе башҡорттарҙың күпселеге рус телендә аралаша, шуға күрә, тиҫтерҙәрем телде насар белә йәки бөтөнләй белмәй. Бында барыһынан элек ғаилә ғәйепле. Минеңсә, милли ғорурлыҡ, үҙаң, әҙәплелек тәрбиәләүҙә ғаиләнең, ата-әсәнең әһәмиәте ифрат ҙур, йәғни тәрбиә башы - ғаиләлә. Бишектәге бала бишкә төрләнә, тиһәләр ҙә, ата-әсәнең тәрбиәһе - төүнигеҙ, уны бер нindәй бишкә төрләнеүҙәр ҙә үҙгәртә алмай. Милләт асылы, рух, аң-аҡыл, фекерләү һәләте, донъяға ҡараш барыһынан бигерәк әсә һөтөнән, ата ҡанынан бар була. Оя-һында ни күрһә, осҡанында шул булыр, ти халыҡ аҡылы.

Ғөмүмән, бөгөнгө йәштәр араһында әхлаҡлылыҡтың түбән булыуы, патриотлыҡ төшөнсәһенең бөтөнләй юғала барыуы борсолдора. Үҫмерҙәр тарих менән бөтөнләй тиерлек ҡыҙыҡһынмай. Ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған рухи хазинаны өйрәнеп, тәрбиә алыр урынға, беҙ күберәк сит ил музыкаһын тыңлап, әҙәбиәтен уҡып, Голливуд актерҙарының тарихы менән ҡыҙыҡһынып ғүмер итәбеҙ. Тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе үҙ ҡулдарыбыҙ менән юҡҡа сығарабыҙ түгелме? Тиңдәштәребеҙ араһында хатта шәжәрәләре менән ҡыҙыҡһынмағандар, олатай-өләсәһенең кем булыуын да белмәгәндәр күп. Ата-бабаларының тамырын белмәгәндәр милләтенең, республикаһының яҙмышына ла битараф булып үҫә. Шундай хәл булмаһын өсөн мин мәктәптәрҙә күберәк шәжәрә байрамдары үткәрергә, яҙыусылар, тарихсы-ғалимдар менән дискуссия-осрашыуҙар үткәрергә тәҡдим итер инем. Ә бит ундай тәрбиәүи сараларҙың һөҙөмтәһе бар. Мәҫәлән, Еңеүҙең 70 йыллығын билдәләгәндә "Үлемһеҙ полк" акцияһында ҡатнашып, күптәр үҙҙәренең ата-олатайҙарының батырлыҡтары менән ҡыҙыҡһынды, уларҙың фотоһүрәттәрен күтәреп, парадта ҡатнашты. Ошо парадтан һуң үҙем белгән тиҫтерҙәремдең күҙҙәрендә, йөҙҙәрендә ғорурлыҡ сатҡылары күреп һөйөндөм.

Башҡорт баҫмаларында: "Милли хәрәкәттә яңы лидерҙар күренмәй тиерлек, ләкин йәмәғәт эштәренә битараф булмаған йәштәр аҙ түгел, тик уларҙы ваҡытында иғтибар үҙәгенә алып, эштәрендә ярҙам итеү мөмкинлеген табырға кәрәк", - тигән фекерҙәрҙе йыш уҡырға була. Минеңсә, булаҫаҡ лидерҙарҙы балалар баҡсаһынан уҡ тәрбиәләй башлау фарыз. Бәләкәйҙән үк үҙ туған телендә аралашып, үҙенең милләттәш тиҫтерҙәре араһында үҫмәгән балаларҙан милли лидерҙар сыҡмаясаҡ. Ә мәктәптәрҙә мотлаҡ йәш лидерҙар тәрбиәләү ойошмалары булдырыу, уларҙың эшен әүҙемләштереү кәрәк.

Дуҫтарым, йәнәшәбеҙҙәге телем, илем, тип янып-көйөп йөрөгән милләттәштәребеҙгә "батыр" тип өндәшәйек, бер-беребеҙгә терәк булайыҡ, ауыр саҡта ярҙам итәйек. Беҙҙе "бахыр" тип кәмһетеүселәргә лайыҡлы яуап биреү өсөн тарихыбыҙҙы өйрәнәйек, тартынмайынса, туған телебеҙҙә һөйләшәйек. Сәйәсәт, иҡтисад, эшҡыуарлыҡ, тәбиғәт, мәғариф, тел проблемаларын бергә сисһәк, яңы фекерҙәр, яңы уйҙар һәм мәсьәләне дөрөҫ хәл итеү юлдары асылырға күҙаллаһыр ине. Киләсәк беҙҙән башлана икәнен онотмайыҡ!

Диана **МӨХӘМӘТЙӘНОВА.**

## ИҢ КӘРӘКЛЕ ДАРЫУҘАР...

**Кеше ғүмере өсөн иң кәрәкле дарыу препараттары исемлегенә өҫтәмә препараттар, шул иҫәптән Рәсәйҙә етештерелгәндәре лә, индерелде. Рәсәй Хөкүмәте 2016 йылға медицина ҡулланыуы өсөн препараттар исемлеген раҫланы.**

Иң мөһим дарыу препараттары исемлегенә өҫтәмә рәүештә 43 дарыу препараты (шуларҙың алтауһы - Рәсәйҙә етештерелгәне) индерелде, бер дарыу препараты (Рәсәй етештереүсеһенеке) алып ташланды. Шуның менән халыҡ-ара патентланмаған препараттар атамалары күрһәтелгән исемлек 604-тән 646-ға тиклем тулыланды. Айырым категория граждандарҙы тәьмин итеү өсөн медикаменттар иҫәбенә өҫтәмә рәүештә 15 дарыу препараты (шуларҙың алтауһы - Рәсәй етештереүсеһенеке) индерелде. Ҡиммәтле дарыу препараттары исемлеге Рәсәйҙәге булмаған тағы бер препарат менән тулыландырылды.

Фәүзиә **ИҘЕЛБАЕВА** әҙерләне.

## ШАРТТАР ҮҘГӘРҘЕ

**"Башҡортостан Республикаһында күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында"ғы законға үҙгәрештәр индерелде.**

Уға ярашлы, күп балалы ғаиләләрҙең ҡайһы бер категорияларына айлыҡ пособие түләү, шулай уҡ дүрт һәм унан күберәк балалы булып, ауыл ерендә йәшәгән күп балалы ғаиләләргә торлаҡ һәм коммуналь түләүҙәргә сығымдарҙы ҡаплауға айлыҡ аҡсалата компенсация түләү шарттары үҙгәрәсәк. БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2016 йылдың 1 ғинуарынан айлыҡ аҡсалата компенсация аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә йән башына ғаилә килеме күләме йәшәү минимумы кимәләнән артмаған осраҡта ғына түләнәсәк. Күп балалы ғаиләләргә пособие һәм айлыҡ аҡсалата компенсация тәғәйенләү буйынса Республика социаль ярҙам үҙәгенең йәшәгән урындағы филиалына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

О, СПОРТ!

# ЯҠТАШЫБЫҘ - ЕВРОПА ЧЕМПИОНЫ!



**Өфө егете, шорт-трексы, 2014 йылда Сочи ҡалаһында үткән XXII Ҡышҡы Олимпия уйындарында - эстафета буйынса чемпион исемен, былтыр Мәскәүҙә уҙған конькиҙа шыуыу буйынса донъя чемпионатында ла беренселекте яулаған, дүрт тапҡыр Европа чемпионы Семен Елистратов ошо көндәрҙә тағы бер алтынлы еңеү яуланы - ҡояшлы Сочиҙа шорт-трек буйынса Европа чемпионатында күп төрлө ярышта (многоборье) беренселекте ҡулынан ысҡындырманы.**

Семен Елистратов 1990 йылда Өфө ҡалаһында тыуған, Өфөнөң олимпия резервын әҙерләүсе 1-се балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбендә А. И. Максимов етәкселегендә тәрбиәләнгән. Беренсе тапҡыр донъя кимәлендәге ярышта үҙ көсөн 2006 йылда үткән донъя кубогында һынай. Дебютынан һуң икенсе йылына Рәсәй йыйылма командаһына алына. 2014 йылда Рәсәй Федерацияһы Президенты указы менән физик культура һәм спортты үҫтереүгә ҙур өлөш индергәне, Сочи ҡалаһында үткән XXII Ҡышҡы Олимпия уйындарында юғары уңыштары өсөн Дуҫлыҡ ордены менән наградлана.

Ошо мәғлүмәткә бәйләп, уҡыусыларыбыҙға шорт-трек спорт төрө тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт килтереп үтәйек. Ул инглиз теленән, ҡыҫҡа арағa конькиҙа йүгереү, тип тәржемә ителә. Шорт-трек ҡағиҙәләре ҡаты ғына. Был саралар ярыштың үтә киҫкен, ҡыҙыу тоҫ алыуы арҡаһында уйлап сығарылған. Ярыш ваҡытында дәғүәселәргә: бер-береһенә ҡамасауларға, юлды ҡырҡырға, үҙеңдән етеҙерәк йүгергән спортсыныҥ юлына арҡыры төшөргә, финиш һыҙығын үткәндә, аяҡты алға ташлау (коньки бысағын боҙҙан айырмай ташлау ғына ярай), командалаштарыңды этеп, ярҙам итеү (эстафета тапшырыуҙан башҡа) һәм ике һәм унан да күберәк спортсыға үҙ-ара һөйләшеп, килешеп уҙышыу тыйыла.

Шорт-трек ҡорамалдарына килгәндә, улар түбәндәгесә: коньки бысағы аяҡ кейеменә ҡыбырламаҫлыҡ, айырып алып булмаҫлыҡ итеп беркетелә. Бысаҡтар аяҡ кейеменең уртаһына ҡарата һул яҡҡа күсерелгән. Был хәйлә спортсыларға боҙға ятып тигәндәй ярышырға мөмкинлек бирә. Әйткәндәй, һул яҡ бирсәткәнең бармаҡ остарына махсус бармаҡсын һымаҡ һаҡлағыстар йәбештерелә. Быныһы инде спортсыға кәрәк саҡта боҙға таянып-таянып алыу мөмкинлеге бирә. Тағы ла спортсының һаулығын һәм ғүмерен һаҡлай торған ҡаты башлыҡлы кейем дә бар.

Рәсәйгә шорт-трек беренсе мәртәбә 1985 йылда беҙҙең ил Италияның Беллуно ҡалаһында булып үткән Универсиадала ҡатнашҡандан һуң үтеп инә. АҠШ-та һәм Канадала, үҙенең ватанында, шорт-трек хатта классик конькиҙа шыуыу спортынан да билдәләрәк икән.

Иҙел **РӘХИМОВ** әҙерләне.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### "Тауыҡ күҙ"

❖ Күҙҙең лайлалы тиресәһе шешеүе һәм "тауыҡ күҙ" сире күк сәскә (василек синий) менән дауалана. Сәскәне майҙан алып авгуҫҡа тиклем йыйылар. Сәскә кәрзинен өҙөп алаһың һәм сәскә таждарын күләгәлә киптерәһен. 2 балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡояһың (был 1 тәүлеккә етә). Төнәтмәне әсәһең һәм күҙҙәргә сылатҡыс ҡуяһың. Тәүге көндә үк еңеллек тойһағыҙ ҙа, дауаланыуҙы 10 көнгә тултырығыҙ.

### Йүткереү

❖ Бер нисә йылға һуҙылған ҡоро йүткереү менән яфаланыусылар өсөн кәңәш (уны йөрәк йүткереүе тип тә йөрөтәләр): йүткертә башлаған та танау менән йыш-йыш итеп тын алырға. Йүткереү шунда уҡ туҡтай. Ошо рәүешле тын алыу күнегеүҙәре менән был сирҙе еңергә була.

### Тимерәү

❖ Көнөнә 3 тапҡыр йәшел һыу (зеленка) һөртөп, кипкәс тә Этоний майы һөртөргә. Ул яраны йүнәлтә һәм бактерияларға ҡаршы ҡулланыла. Дауаланыу курсы оҙайлы, 3-6 аҙна дауам итә.

### Һалҡын тейгәндә...

❖ Ауырый башлағанығыҙҙы тойғас та ҙур ғына бер һуғанды ҡырғыстан үткәреп, юрған аҫтында һуған быуы менән тын алырға. Сәғәт һайын ҡабатларға. Ауырыу ныҡ аҙып өлгәрһә, ошо процедураға өҫтәп һуған һутына манылған мамыҡты ҡолаҡҡа ҡуйырға.

❖ Тымаулап торһағыҙ, танау ҡыуышлығын яңы ғына бешерелгән сәй менән сайығыҙ. Балаларҙың танауын сайыу өсөн уларҙы ҡабырғаһына һалырға һәм ауыҙ менән тын алырға ҡушырға. Процедураны энәһеҙ медицина шприцы менән эшләргә. Бынан һуң танауҙы һемгертергә кәрәк. Әгәр ҙә ауырый башлаған көндә 5 тапҡыр эшләһәгеҙ, тымау өс көндә үтә.

❖ Ангинаны әрем (полынь) төнәтмәһе яҡшы дауалай. 2-3 сәғәт һайын тамаҡты сайҡатырға кәрәк.

Айбикә **ЯҠУПОВА.**

✓ *Унда ул ойоштороусыларҙы шаҡ ҡатырып, 16 килолыҡ герҙе 10 минут эсендә 121 тапҡыр күтәреп күрһәтә. Судьялар урта буйлы ғына, артыҡ ҡалын булмаған ҡатындан быndайҙы көтмәгән була, әлбиттә.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҺАЙЫҪҠАНҺЫҘ... ил булмаҫ

**Үткән быуаттың 20-се йылдарында бер риүәйәт яҙып алына. Унда һырҙа башҡорто Тимерҡотто тигән бей Сыңғыҙхан ҡулынан ырыуы атрибуты итеп һайыҫҡанды ала, тиелә.**

Башҡа бейҙәр уны шаяртып, көлә башлағас, Сыңғыҙхан, имеш, шулай тип әйткән:

*"Һеҙҙең арала Тимерҡотто аҡыллы...*
*Тимерҡотто..., ҡошо барҙа, ил табыр;*
*Һайыҫҡанһыҙ ил булмаҫ!..."*

Билдәле ғалим-этнограф М.Н. Сөләймәнова мәғлүмәттәренә ярашлы, һайыҫҡан тамъяндарҙың да изге ҡошо. Әммә "Сыңғыҙхан" дастанында әйтелеүенсә, Тамъян бейгә ҡарға эләгә. Ошондай уҡ легенда ҡарағай-ҡыпсаҡтарҙа (Бөрйән районы, Исламбай ауылы) теркәлгән: уларҙың ата-бабалары матурлыҡта һайыҫҡанға тиң ҡош юҡ тип, изге ҡош итеп һайыҫҡанды һайлай. Шул уҡ ваҡытта шуны ла иҫтән сығарырға ярамай: фәнни әҙәбиәттә ҡыпсаҡтарҙың изге ҡошо бөркөт тип ҡарала. Ғалимдар хаҡлы билдәләүенсә, изге ҡоштар тураһындағы ҡараштар тотемик ышаныуҙар менән бәйле.

Башҡорт фольклорында һайыҫҡан кешеләрҙе һаҡлаусы булып сығыш яһай. "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосында башҡорттарҙың юлбашсыһы Баба Туҡләстың бойороғо буйынса, һайыҫҡан мәмерйәлә Урал батырҙың ҡылысын һаҡлай, Иҙеүкәйгә тоғро ярҙамсы булырға вәғәҙәләй:

*"...Юғалғаның эҙләһәң,*
*Табышырмын мин һиңә".*

Шулай тигәс, ул Урал батырҙың яу кәрәк-яраҡтары йәшерелгән урынға алып килә.

"Алтынсәс" әкиәтендә ағас төбөндә ояһынан ҡолап төшкән һайыҫҡан балаларын күргәс, батыр уларҙы кире мендереп ҡуя. Быныц өсөн бик тә рәхмәтле булған һайыҫҡан балалары аҙаҡтан уға ете диңгеҙ, урман һәм тауҙар аша тере һәм үле һыуҙы табып бирә.

Үҫәргән башҡорттары ышаныуы буйынса, йорт-ҡура тирәһенә оялаған һайыҫҡандың ояһын туҙҙырырға ярамай - ул йорт хайуандарын йыртҡыс йәнлектәрҙән һаҡлай, тиҙәр. Тауыҡ кетәге эргәһенә үлтерелгән һайыҫҡанды элеп ҡуйыу ошо ышаныуҙың ҡалдығы. Шул саҡта йыртҡыс йәнлектәр тауыҡ йомортҡаларына теймәй, ти.

Ошо мотив балаларҙың "Әбәк" уйынында күренә. Уйындың ҡағиҙәһе буйынса, бер ҡатнашыусы - "көтөүсе": "Һайыҫҡандай шыҡырыҡлап, мин йөрөйөм өй һаҡлап..., һиңә тейәм, һин әбәк", ти ҙә, түңәрәктә тороусыларҙың береһенә ҡулы менән тейә лә ҡаса. Артабан ошо кеше "көтөүсе" була.

Был фольклор сюжеттарында һәм көнкүреш йолаларында һайыҫҡандың борон тотем ҡош булыуы сағыла ла инде. Ата-бабаларыбыҙ һайыҫҡанды кешене, йортто, йорт хайуандарын һаҡлаусы тип ололаған. Башҡорт фольклорындағы был ҡараштар Евразия халыҡтарының дини-мифологик ҡараштарында ла осрай.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БӨРЙӘНДЕҢ ТАҒЫ БЕР МӨҒЖИЗӘҺЕ

**Көслө ҡатын-ҡыҙҙар беҙҙең халыҡ өсөн ят күренеш түгел. Был күренеш хатта беҙҙең мифологияла ла урын алған. Мәҫәлән, "Алпамыша менән Барсынһылыу"ҙа көслө ҡыҙҙы яҡын-тирәлә көрәштә еңә алған егет булмай. Алпамыша менән дә улар ете көн, ете төн алыша. Был мәлдә уҡыусы күҙе алдына әзмәүерҙәй һылыу килеп баҫалыр ҙа ул, әммә әкиәттә Барсын йылға ҡамышы ише нескә буйлы, ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйғас ҡашлы, ай йөҙлө, ынйы тешле итеп һүрәтләнә. Тимәк, көслөлөк бәһлеүәнлек тигәнде аңлатмай.**



Ә ҡайҙан килә һуң ғәҙәти кешегә ундай Алпамыша көсө? Был һорауға яуапты бер бөгөн генә түгел, борон-борондан эҙләгәндәр. Суфыйҙар, кеше йәне үтә сафланғансы таҙарһа, ул шундай мөғжизәле көскә эйә булырға мөмкин, тип иҫбатлаған. Көнсығыш халыҡтарында ла эске көстөң асылыуы күп кирәмәттәр тыуҙыра ала, тигән төшөнсә йәшәй. Тимәк, кеше тормошонда күп нәмәне уның эске көсө хәл итә. Ҡарар күҙгә сибек кенә булғандар ҙа ҡайһы мәл шаҡтай ауырлыҡтарҙы күтәрә, йырып сыға ала. Тауҙай көслө күренгән әҙәмдәр иһә һынып, бөгөлөп төшөүе ихтимал. Ҡайһы саҡ йәшәйештең ниндәйҙер бер мәлендә уянып киткән был көс хужаһынан әллә ниндәй батырлыҡтар, матурлыҡтар, мөғжизәләр тыуҙырта. Психологтар әйтеүенсә, ул көс беҙҙең барыбыҙҙа ла бар, тик күптәр уны уята һәм ҡуллана ғына белмәй. Бының өсөн, бәлки, ер тетрәүе мәлендә тын йылға аҫтынан бәреп сыҡҡан көслө ағым кеүек, кешене тетрәндереп, уның ысынбарлығын уятып ебәргәндәй берәй этәргес кәрәктер. Ә, бәлки, был тәбиғәттең кеше аша күрһәткән бер мөғжизәһе генәлер. Бөрйән мөғжизәһе кеүек.

Донъялағы иң көслө ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһе Бөрйән районының Ғәҙелгәрәй ауылында йәшәй, тигән хәбәргә ысынлап аптыраным. Нисек инде? Америкала ла, Мәскәүҙә лә, хатта Өфөлә лә түгел, ә урман ҡуйынындағы бер ауылда. Чемпион булып даны таралғанына ла инде арыуыҡ, ә ул һаман шул төбәгендә.

Үрҙә әйтелгән шикелле үҙем дә апайҙы бик эре һөйәкле итеп күҙаллап торһам, ҡапҡаны ғәҙәти генә урта буйлы ҡатын килеп асты. Эскә үттек, мин һаман да баһадирҙы күрергә өмөтләнәм. Ә унда, баҡтиһәң, башҡа кеше юҡ.

- Һеҙме, атыу, иң көслө ҡатын? - тип һорайым ахырҙа.

Хужабикә көлөп ебәрә:

- Миндер шул...

Ул бөгөн көнө буйы мине көткән икән. Ике яҡлы йыйнаҡ өйө йылы, яңы ғына баҫылған мейесе рәхәтлек бөркөп ултыра. Аш һалған, сәйен сыжлатты. Ауыл ябайлығы менән тиҙ генә танышып, һөйләшеп киттек. Шулай итеп, был кис мине табында донъяның иң көслө ҡатыны хеҙмәтләндерҙе: һыйланы, ҡыҙыҡлы хәл-ваҡиғалар һөйләне, хатта төнөн урамға алып сығып, ҡышҡы ауыл матурлығын да күрһәтте.

Бала сағында ла, быға саса йәшәгән ғүмерендә лә Сәмәрә Әхәт ҡыҙы Хәлитова артыҡ көсө менән дә, үҙе әйтмешләй, башҡа яҡтары менән дә башҡаларҙан бер ниһе менән дә айырылмаған. Кейәүгә сыҡҡан, балалар үҫтергән, ауыл мәктәбендә өс тиҫтә йыллап физкультуранан уҡытҡан. Ирен иртә юғалтып, бөтөн йәшәйеш ауырлыҡтарын нескә иңдәренә алғандамы, әллә ата-әсәһенән йәшләй генә тороп ҡалып, бәләкәй туғандарын тәрбиәләп үҫтерергә тура килгәндәме - ҡасан унда эске көс асылалыр, билдәһеҙ. "Беҙҙә ауылда һәр ҡатын-ҡыҙ шулай эшләй инде ул", тип, бер ҡатлы ғына итеп аҡланһа ла, арҡалы кешенең арҡалы булыуын аҙ ғына донъя күргән һәр кеше аңлайҙыр. Ә ата-әсәһеҙ бала саҡ, үҙеңдән бәләкәй биш туғаныңа яуаплылыҡ, ирһеҙ ауыл йәшәйеше, шулай уҡ биш баланы күтәреп аяҡҡа баҫтырыу һәр ҡатын-ҡыҙҙың хәленән килә торған эш түгел. Тыуған яғының тәбиғәте кеүек, бер аҙ ҡырыҫыраҡ, хатта йомоғораҡ холҡо эсендәге кисерештәрен сайпылтып күрһәтеп бармай. Күп нәмәне эскә йомоп үткәрә белгәнлеге күҙ ҡарашынан, үҙен тотошонан һиҙелеп тора. Ә бит шулай ҙа иң көслө кеше лә тимерҙән яһалмаған. Уның да ҡара тырышлығы, сәме, сабырлығы һәм баҫалҡылығы аръяғында, бәлки, күптәрҙекенән нескәрәк тә, олораҡ та күңеле бар. Һәм ул күңелдең дә тулыр, өҙөлөр, ҡурҡыр көндәре булалыр. Ана шул мәлдәрҙе эстән һыҙып үткәреү, урттағы ҡанды эскә йота белеү, үҙ-үҙеңә ебергә, бирешергә юл ҡуймау кешенең рухын сынысҡтыралыр, күрәһең. Ысынлап та, тәжрибә күрһәтеүенсә, билдәле спортсыларҙы спорт бер үҙе генә түгел, ә тормош ҡаршылыҡтары, ауырлыҡтар, хатта өмөтһөҙлөк сигенә еткергән хәл-ваҡиғалар тәрбиәләй.

Хаҡлы ялға сыҡҡас, Сәмәрә Әхәт ҡыҙы ҡыштарын район үҙәге Иҫке Собханғол физкультура-һауыҡтырыу үҙәгендә тренер булып йөрөһә, йәйҙәрен Шүлгәнташ мәмерйәһенә ял итергә килеүселәрҙе ҡоймаҡ һәм сәй менән һыйлай. Шул ысулдар менән ул һаман да балаларына ярҙамсы, терәк булырға тырыша. Ә инде гер күтәреүгә килгәндә, был шөғөл бөтөнләй осраҡлы килеп сыға. Район хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте һәм спорт бүлеген етәкләгән ҡустыһы бер һуғылып киткәнендә ҡайҙандыр хасил булып, әллә ҡасандан ошонда ултырған герҙе аңғарып: "Кем бының менән шөғөлләнә?" тип һорап ҡуя. "Мин", тип шаярта апаһы. Ғайса Әхәт улы элеп тә ала: "Егермене күтәрә алһаң, миңә хәбәр ит - ярышҡа алып барам", - ти. Ҡустыһы ҡайтып киткәс, ысынлап гер күтәрергә тотоноп китә Сәмәрә Әхәт ҡыҙы. 16 килолыҡ герҙе бер ауырлыҡһыҙ егерме тапҡыр күтәреп, тағы бер-ике көн шөғөлләнгәндән һуң, иллегә тултырып ҡуя. Ҡустыһына хәбәр итһә, тегенеһе "Ә йөҙҙө?" тип, тағы ла юғарыраҡ планка ҡуя. Тора-бара йөҙҙө лә күтәрә нығыш ҡатын. Унан Ғайса Әхәт улы уны ай-вайына ҡуймай, республика, унан халыҡ-ара ярышҡа алып сыға. Унда ул ойоштороусыларҙы шаҡ ҡатырып, 16 килолыҡ герҙе 10 минут эсендә 121 тапҡыр күтәреп күрһәтә. Судьялар урта буйлы ғына, артыҡ ҡалын булмаған ҡатындан быndайҙы көтмәгән була, әлбиттә. Ошо хәлдән һуң башлана инде барыһы ла. Керчь ҡалаһында ветеран-спортсылар араһында Европа чемпионаты үткәрелә. Бөрйән спортсыһы унда 50-54 йәшлектәр араһында шулай уҡ алдынғылыҡты бирмәй. Бер-бер артлы биш тапҡыр Донъя чемпионы исеменә лайыҡ була. Донъя рекордын ҡуя. Минскиҙағы планета беренселегендә иң яҡшыһы булыуға өлгәшә һәм әлегә тиклем үҙ категорияһында донъяның иң көслө ҡатын-ҡыҙы тигән исемде тотоп килә.

Һәм бына шундай спортсы, районда, республикала, хатта илдә бер булған шәхес, милләтебеҙҙең мәртәбәһен, данын күтәрер кеше төпкөл ауылда ябай ғына көн итеп ята. Уның был уңыштарын күптәр белмәйҙер ҙә әле. Был белмәүселәр иҫәбенә район һәм республика спорт өлкәһе етәкселеге лә инәлер, тип уйлайым, сөнки Сәмәрә Әхәт ҡыҙына, аҡса булмау сәбәпле, күп бәйгеләргә бара алмай ҡалырға тура килә. Шулай уҡ был хеҙмәте өсөн бер ниндәй килем дә алмай. Бөгөнгө көндә биш тапҡыр Донъя чемпионы булған спортсының ил данын рәхмәткә яҡлап йөрөүен күҙ алдына килтерегеҙ әле! Ҡыш айҙарында район үҙәгендә эшләгәндә лә ҡуртымға фатир алып, түләп йәшәй, ер һорап мөрәжәғәт иткән үтенесен дә кире ҡаҡҡандар. Уйлап ҡараһаң, быndай шарттарҙа нисек итеп көслө булмаҫҡа мөмкин? Ә шулай ҙа күңеле көр, рухы күтәренке Сәмәрә апайҙың, киләһе чемпионатҡа әҙерләнә - ҡолас ташлап утын яра.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

✓ *Башҡорттар хатта ки икмәк киҫәген дә бер үҙҙәре генә ашай алмай икән, тип һөйләйҙәр. Ҡыҙыҡ күреп, старшина малайына ҡалас биргәйнек, ул уны ваҡ ҡына киҫәктәргә бүлеп, шунда ултырған башҡорттарға таратып сыҡты.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*



**Татьяна Львовна Сухотина-Толстая (1864-1950) бөйөк урыҫ яҙыусыһының өлкән ҡыҙы. Ғүмере буйы рухи яҡтан атаһының иң яҡын кешеләренең береһе була. Яҙыусы өлкән йәштәрҙә сағында ҡатыны менән аңлашылмаусылыҡ барлыҡҡа килгән йылдарҙа ла Татьяна Львовна атаһын аңлай. "Ул атаһының да, әсәһенең дә күңелен йыуатырлыҡ яйлы һүҙҙәр таба ине", - тип яҙа уның хаҡында Л. Толстойҙың секретары В. Булгаков. Т. Л. Толстаяның иҫтәлектәре һәләтле яҙыусы ҡулы менән яҙылған. Тәүге иҫтәлектәр көндәлектәрен ул ун дүрт йәшендә башлай һәм ғүмере буйы дауам итә. Билдәле булыуынса, Лев Толстой башҡорт ҡымыҙы эсергә һәм далала ял итергә ғаиләһе менән дә килә. Таня башҡорттарҙы бик ярата һәм йылы иҫтәлектәр яҙып ҡалдыра. Был иҫтәлектәр 1976 йылда Мәскәү ҡалаһында нәшер ителгән "Т. Л. Сухотина-Толстая. Воспоминания" тигән китабынан тәржемә итеп алынды.**

# ТОЛСТОЙҘЫҢ БАШҠОРТТАРҘА БУЛҒАНЫ,

## бәйге ойошторғаны



*"Лев Толстой башҡорт далаларында". Әмир Арыҫланов. 1978.*

* * *

Башҡорт ауылы йылға буйында ине. Мин, әлбиттә, бер-береһенән ҡаты ер менән айырылып ятҡан бәләкәй-бәләкәй генә түңәрәк өҙөк-өҙөк күлдәрҙе бер нисек тә йылға (Кәрәлек йылғаһы - **М. Б.**) тип атай алмаҫ инем.

Өйҙәр таҙа һәм ыҡсым. Беҙ туҡтаған мулла ҡунаҡсыл һәм ихлас ҡаршыланы. Күп тә үтмәне, атайымдың элекке таныштары килә башланы. Улар араһында урыҫсалап Михаил Иванович тип йөрөткән көр күңелле өлкән йәштәрҙәге башҡорт бар. Ул килеү менән атайыма сатраш уйнарға тәҡдим итте. Атайым ризалашты. Уйнаған саҡта бер аҙ уйларға кәрәк булһа, Михаил Иванович сикәһен тырнап ҡуя ла:

- Думить надо. Ба-а-альшой думить надо, - ти.

Шул арала беҙҙең йорт хужаһының хеҙмәтсеһе һарыҡ һуйырға ебәрелде, ә аш әҙер булғанға тиклем беҙгә сәй һәм ҡымыҙ тәҡдим иттеләр.

Һарыҡ ите бешеп сыҡҡас, хеҙмәтсе киҫәк-киҫәк һимеҙ һарыҡ ите тултырылған һауыт алып инде. Мин, башҡорт ғәҙәте буйынса, ризыҡтан баш тартырға ярамағанлығын ишетеп белә инем (һүҙ һоғондороу йолаһы тураһында баралыр - **М. Б.**). Бындай хәл хужаның хәтерен ҡалдыра икән. Миңә һөйләүҙәренсә, ҡунаҡ өлөшөнән баш тартһа, хужа иттең һимеҙ урыны менән ҡунаҡтың битен буяй башлай, шунан ҡунаҡ үҙ киҫәген ашарға мәжбүр була икән. Шуға ла хужа ит киҫәге алып миңә яҡыная башлағайны, мин тиҙ генә һоғоноп ҡуйҙым. Әйтергә кәрәк, ит киҫәген һоғоноу ҡыйын булманы, сөнки оҙон юлдан һуң асыҡҡайныҡ, ә ит бик йомшаҡ бешкәйне. Ул саҡта мин әле вегетарианка түгел инем, ул хаҡта беҙҙә телгә алыусы ла юҡ ине.

Атайым кем менән аралашһа ла уртаҡ тел таба торғайны. Һәр кеше менән ҡыҙыҡлы әңгәмә ҡорорлоҡ һүҙ таба ине. Мулла менән дин тураһында һөйләшһә, Михаил Иванович менән мәрәкәләште, ә хужа менән инде сәсеү, ат, һауа торошо тураһында һөйләште.

Төштән һуң беҙ йылҡы өйөрө ҡарарға барҙыҡ. Әсәйем бер ҡола бейәне маҡтаны - минең ятраҡан төҫөм тине. Ә атайым бейәнең ҡулға тиҙ эйәләшеүен дә телгә алды.

Кәрәлек йылғаһы тип аталған түңәрәк күлдәр эргәһенән үткән саҡта һыу өҫтөндә аҡ томбойоҡтар күреп һоҡландым. Мин тымыҡ һыуҙы, ундағы матур сәскәләрҙе күреп ғәжәпкә ҡалдым. Ынтылып, бер генә сәскә өҙәйем тигәйнем, буйым етмәне. Шул саҡта мулланың йәш кенә улы, Нәғим исемле башҡорт, галушын, йомшаҡ ҡына йәшел ситеген сисеп, салбарының балаҡтарын төрҙө лә күлгә инеп китте. Бер гөлләмә томбойоҡтар өҙөп алды ла миңә бирҙе. Мин ундай иғтибарға өйрәнмәгәс, йөҙөмдө ҡыҙыллыҡ баҫты, эстән генә рәхмәт әйтеп, гөлләмәне алдым.

Эңер төшкәс, беҙ киң күңелле хужалар менән хушлаштыҡ. Атайым менән әсәйем ултырып килгән арба тирәсенә әсәйем һоҡланған ҡола бейәне бәйләп ҡуйғайнылар. Хужа уны ҡунағына бүләк иткән. Көнсығыш халҡында оҡшаған нәмәне бүләк итеү йолаһы бар икән. Әсәйем бик ныҡ уңайһыҙланды.

- Ҡалай оят! - тип аптыраны ул. - Ни эшләп улай итәһегеҙ? Белһәм, бөтөнләй маҡтамаған булыр инем...

Әсәйем бейәне кире ҡалдырмаҡсы булғайны, атайым тыйҙы. Бүләкте алмауҙың хужаны үпкәләтеү булғанын атайым белә ине.

Ул хушлашҡанда, мулланың ҡулдарын ихлас ҡыҫып, рәхмәт әйтте, һәм беҙ ҡайтып киттек. Арба тирәсенә бәйләнгән ҡола бейә күңелле генә саба ине, ә әсәйем йоланы онотоуына, бейәне юҡҡа маҡтауына һаман үкенеп барҙы.

Атайым, хужаның ҡатыны менән ҡыҙы биҙәнеү әйбере итеп файҙаланһын өсөн, яйын тура килтереп, хужаға бер-нисә тәңкә бирҙе.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Юлыбыҙ күркәмерәк һәм хәүефһеҙерәк булһын өсөн старшина беҙҙе оҙатырға уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланған дүрт башҡортто ебәрҙе, улар араһында старшинаның улы һәм писаре лә бар ине. Алтмыш саҡрым әллә ни ҙур ара булмауына ҡарамаҫтан, ике тәүлеккә етерлек аҙыҡ алырға кәрәк булды, һәм беҙ бында беҙҙең һәм башҡорттарҙың юлға әҙерләнеүендә бик ҙур айырма булыуын күрҙек. Уларҙың бөтә аҙыҡ-түлеге ҙур булмаған сыр киҫәктәренән (ҡорот - **Ред. иҫк.**) һәм һәр кемдә булған берәр турһыҡ ҡымыҙҙан хасил була. Ябай итеп әйткәндә, улар ошоноң менән туҡ һәм ҡыҙмаса ла була. Бүләк йәйләүенән алыҫлаша барған һайын, башҡорттарҙың уғата ҙур мал көтөүҙәре утлап йөрөгән киң үҙәндәр тирәләй бейегәйә барыусы тауҙарға юлыҡтыҡ. Ҡай саҡта ҡуйы урман шырлыҡтарын үтеп сығырға тура килһә, ҡайһы урында текә тауҙарға һырығып барылды. Бында тау итәктәренән шарлап ағып ятҡан шишмәләр бихисап ине; икенсе яҡта яланғас тау һырттары күккә олғашып тора. Һауа сафлығы, үҫемлектәр сыбарлығы һәм һәр ерҙәге өнһөҙ тынлыҡ ҡарашыбыҙға һәм аңыбыҙға күңел көрлөгө өҫтәй ине. Бына ошо тәбиғәт тарафынан биҙәлгән ерҙә тик башҡорттар ғына йәшәй. Башҡорттарҙы ҡышлауҙа күргән һәр кем быларын икенсе бер кешеләрҙер, тип уйлар. Унда уларҙы кәмһетелгән, ҡурҡыбыраҡ йәшәгән, ныҡ ябыҡҡан хәлдә күрһәләр, йәйләүҙә, киреһенсә, уларҙың ҡыйыу, нисектер ғорурыраҡ, эшмәкәр һәм сәләмәт булыуы асыҡлана. Әммә шул тиклем ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уларҙа ошондай үҙгәреш ҡайҙан бар була икән? Алыҫ таулы урындарҙа йәшәү уларҙа ниндәйҙер азатлыҡ тойғоһон тыуҙыра. Һауаның саф һәм хуш еҫле, күнегелгән аҙыҡтарының һаулыҡҡа бик тә файҙалы булыуы, иркен һәм хәстәрһеҙ тормош уларҙың йәненә һәм тәненә ҡеүәт бирә.

Бигерәк тә уларҙың ҡунаҡсыллығын күҙәтеү күңелебеҙгә хуш килде. Башҡорттар һәр бер йәйләүҙә туҡтамайынса китмәй; хужаның иң йәш ҡатыны ҡунаҡтарҙың аттарын ҡаршы алып, тирмәгә бәйләп ҡуя, эйәрҙәрен һалдырып, тирен ҡорота. Тирмәгә инеүсе ҡунаҡтар хужалар менән ҡул ҡыҫышып күрешә һәм, баш кейемдәрен һалып тормайынса, ултырыша. Шул саҡта хужа йәиһә хужабикә туҫтаҡҡа ҡымыҙ ҡойоп, үҙенә яҡын кешегә бирә, ул, доға ҡылып, эргәһендә ултырыусыға тоттора; һуңғы кешегә еткәнсе, ошолай дауам итә, һәм беренсе ултырыусы кешегә ҡымыҙ бөтәһенән дә һуңыраҡ эләгә. Башҡорт нисек кенә туҡ булмаһын, иң кәмендә ике оло туҫтаҡ ҡымыҙ эсергә мәжбүр була: шунан да аҙыраҡ эсеү хужаны үпкәләтеүгә тиң була. Ҡымыҙ эсеп туйғас, Аллаһҡа шөкөр ҡылып, доға ҡылалар. Шунан һуң хужа уларға юлға ла ҡымыҙ бирә, һәм үҙе бер ниһеҙ ҡалған хәлдә лә, ҡунаҡтарын бүләкһеҙ ебәрмәйәсәк. Башҡорттарҙың ошо ғәҙәте шул тиклемгә барып етә, хатта ки улар икмәк киҫәген дә бер үҙҙәре генә ашай алмай икән, тип һөйләйҙәр. Ҡыҙыҡ күреп, беҙҙең менән булған старшина малайына ҡалас биргәйнек, ул уны ваҡ ҡына киҫәктәргә бүлеп, шунда ултырған башҡорттарға таратып сыҡты.

**(Дауамы бар).**

✓ *Проблема бар, тип әйтеү генә аҙ, отчет докладтары ла бер ни үҙгәртә алмай, бында тап ауыл хужалығы белгестәренең яңы концепцияларын, яңы ысулдарын ишетеү ҡыҙыҡлы булыр ине.*



**Беҙҙең йәмғиәтебеҙгә шундай сифат хас: бер шәхестең ҡаҙаныштарын күтәрә башлаһаҡ, башҡаларҙың барлығын онотоп ебәрәбеҙ. Ә талантлы, олуғ ижади бейеклектәр яулаған милләттәштәребеҙ бик күп беҙҙең.**

## Шундайҙарҙың береһе…

Ҡайһы быуатты ғына алһаҡ та, башҡорттоң һүҙ сәнғәтендә, рухиәтендә тәрән эҙ ҡалдырған, заманы йырын көйләп киткәндәр бихисап. Уларҙың һәр ҡайһыһының яҙмышы төрлөсә, әммә шуныһы хаҡ: әгәр кемдер тура юлдан барып, дөйөрөнө йөгонто яһарға, көнгөҙәк һүҙҙе әйтергә телән, ошо юлды хаҡ сәфәре тип иҫәпләй, ошо инаныстарынан тыш йәшәй алмай икән, уны ҡатмарлы ҡаршылыҡтар, хатта яҡындары тарафынан ҡыйырһытылыуҙар эҙәрлекләгән, замандаш шәхестәр араһында ла ҡабул итмәүселәр етәрлек булған. Әммә бөйөгәмбәрҙәр туҡмала-туҡмала, таш менән түпәләнә-түпәләнә үҙ маҡсатына атлаған кеүек, заман һүҙен әйткән, ҡәлбеләре асыҡ милләттәштәребеҙ һайлаған юлына, ата-бабалар рухына, халҡы рухиәтенә тоғро. Шундайҙарҙың береһе хаҡында һөйләгем, яңынан иҫкә алғым килә. Уның аянынслы ла, фәһемле лә тормошо мине лә, XXI быуат кешеһен, ҡайтанан уйға һалды, йөрәкте әрнетте, урыны-урыны менән хатта илатты. Уның хаҡында матбуғатта сығыш яһаған әҙәбиәтсе Суфиян

Сафуан Яҡшыголов йәш сағынан уҡ заманының алдынғы шәхесе булып танылa. Ул дин дәрестәре менән бергә донъяуи фәндәрҙе лә өйрәнә: тарих, география, урыҫ теле, көнсығыш әҙәбиәтен үҙләштерә, төрки донъяһының билдәле ғалимы Исмәғил Ғаспраныйның "Тәржеман" гәзите менән танышып бара. Ул, әйтерһең, сарсаған бер юлсы һымаҡ, һәр төрлө сығанаҡтарҙан белем эстәргә тырыша. Аҡмулла Яҡшыголовтың остазы ғына түгел, рухташы ла була. Ҡайһы бер шиғырҙары хатта уның рухында яҙылған, тәү ҡарашҡа авторын билдәләүе лә ауыр төҫлө. Әммә Сафуан Яҡшыголовтың тәү сиратта ғилем эйәһе булыуын иҫкә төшөргәндә, яҙғандарына фәнни нигеҙ, аҡылды егеп, заманға диагноз ҡуйыу хас. Мәҫәлән, "Башҡорт ағаларына хитап" шиғыры остазының фекерен дауам итә, шул уҡ ваҡытта халыҡҡа үҙенсәлекле мөрәжәғәт булып та яңғырай.

*Һеҙҙә бар истиғдад һәм ҡабилиәт,*
*Уҡыуға, уҡытыуға ҡыйлығыҙ гәҙәт.*
*Уҡыуҙыр донъя-ахирәттә сәғәҙәт,*
*Уяныһыҙ, уяныһыҙ, башҡорттарым!*

*Һәр тарафта уҡыу кәрәк, ер кәрәк, тип,*
*Ижтиһад итәләр арып-талып,*

айырылып тора. Ул бармаҡтан һурып, юҡ-бар нәмәне проблема итеп яҙмаған, донъя, бәндәнең йәшәйеше хаҡында аҡыл һатыу, фәлсәфәгә бирелеү менән баш ватмаған. Уның яҙғандары - заманының хәүефтәре, кисекмәҫтән хәл итеүҙе талап иткән милләти мәсьәләләр. Һәм иң ҡыҙығы: бәҡтиһән, башҡорт халҡының проблемалары XIX быуатта ла шул уҡ булған икән дә баһа!

## "Еребеҙҙе юҡ баһаға һаттығыҙ"

Әллә беҙ илтифат итеп бөтмәйбеҙме үҙебеҙҙең "сир"ҙәребеҙгә, әллә симптомдарҙы ғына юҡ итеү менән булабыҙмы, ә "ауырыуҙың"ҡайҙан килеп сығыу этимологияһы менән ҡыҙыҡһынмайбыҙмы? Һаман да шул уҡ тел, ер, эскелек кеүек яман ғәҙәттәр, ғилем мәсьәләләрен сисә алмай яфаланабыҙ. Миҫал итеп Сафуан Яҡшыголовтың шиғырҙарынан өҙөк килтерәм.

*Бына был көн жаһәләткә баттығыҙ,*
*Еребеҙҙе юҡ баһаға һаттығыҙ*
("Дим буйы").

Ер, ер, тип лаф орабыҙ бөгөн дә, бәҡтиһән, ер биләмәләрен законһыҙ бүлеү осраҡтары элек тә булған икән. Халҡыбыҙ вәкилдәре, ауылдарҙа, ҡалаларҙа йәшәгән милләттәштәребеҙ ни ҡыла ала һуң был мәсьәләне хәл итеү өсөн? Улар ҡулынан килгәнен башҡа-

был эшкә фатиха биреүселәргә тағы ла бер тапҡыр рәхмәт!

Йәнә лә:

*Һәр бер урында тырышалар ер кәрәк, тип,*
*Беҙҙән һуңғы балаларға иркенлек, тип,*
*Һеҙ йөрөйһеҙ ҡайҙа банка, нотариус тип,*
*Ер һатырға хәҙерләнеп, башҡорттарым!*
("Башҡорт ағаларына хитап").

С. Яҡшыголовтың ижадын өйрәнгән С. Сафуанов был хаҡта бына нимә яҙған: "Ул үҙ халҡының яҙмышын беренсе сиратта ер мәсьәләһенә бәйләп ҡыштырта. Рәсәй батшалығының колониаль сәйәсәте, бөгөн дә ҡайһы берәүҙәр ауыҙ һыуын ҡоротоп маҡтаған Столыпиндың урыҫ капиталистары файҙаһына башҡарылған реформаһы һөҙөмтәһендә башҡорт халҡының борон-борондан изге милке булып килгән еренән яҙыуын шағир милләттең бөтөүгә табан юл тотоуы тип баһалай". XX быуатта бына ошо рәүешле фекерләргә һәм эш алып барырға була ине. Бөгөн иһә ергә бәйле яңы закондар булдырылған, яңы дәүер кешеһенең мәсьәләне хәл итеү юлдары ла башҡа. Проблема бар, тип әйтеү генә аҙ, отчет докладтары ла бер ни үҙгәртә алмай, бында тап ауыл хужалығы белгестәренең яңы концепцияларын, яңы ысулдарын ишетеү ҡыҙыҡлы булыр ине. Юғиһә, әҙәм ояты ла инде: һаман ер мәсьәләләрен хәл итергә ине, тип

# ИНАНЫСТАРЫНА

## йәки рухи тәғлимәтсе

Сафуановҡа, дәүләт эшмәкәре һәм ғалим Мансур Әйүповҡа рәхмәт. Тарихтағы аҡ тапты аҙмы-күпме тултырған уларҙың яҙмалары. Әммә был ғына аҙ, минеңсә. Сафуан Яҡшыголовты халыҡҡа ҡайтанан ҡайтарырға кәрәк. Миәкәлә тыуып, ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем Дәүләкән районында йәшәгән яҡташым Сафуан Яҡшыголов тураһында хәтирәләр, телдән-телгә күскән легендалар күп. Уны асылда үҙ инаныстарына тоғро ҡалып ғүмер һөргән, шиғыр менән һөйләшкән сәсән тип хәтерләйҙәр.

## Ниҙән хасил рухиәтең?

Бөгөнгөбөҙгә ауаздаш рухи тәғлимәттәр тәҡдим иткән Сафуан Яҡшыголовтың ижади инешенең башында кемдәр тора һуң? XIX быуатты күҙ алдыбыҙға килтерәйек. Совет осоронон һулышы килеп инмәгән ул заманда халыҡ дин нигеҙҙәренә һыйынған, Ислам рухында йәшәгән, ул кешенең мөмкинлектәрен сикләй, тип түгел, аса тип ҡараған, улар иман хаҡында һүҙ алып барған. 1871 йылда тыуып, 1931 йылда донъя ҡуйған Сафуан Яҡшыголовтың ата-бабалары ла башҡорт халҡының ижтимағи тормошонда әүҙем ҡатнашҡан кешеләр була. Егет үҙе Шафиҡ Солтанғолов исемле хәлфәлә, аҙаҡ Дәүләкәндәге мәҙрәсәлә белем ала. Әйткәндәй, район үҙәгендә бындай уҡыу йорто булыуы тураһында ла матбуғатта һирәк әйтелә. Бөгөнгө замандаштар был хаҡта белмәй ҙә тиерлек. Халыҡ араһында Дәүләкән педагогия училищеһы тураһында мәғлүмәт киң билдәле, күренекле яугир-языусылар ошо уҡыу йортон тамамлаған. Ә мәҙрәсә төбәктә дини белем биреү ролен үтәгән.

*Кес кенә ҡырмыҫҡанан үрнәк алып,*
*Һеҙ ҙә ғафил ҡалмаңыҙ, башҡорттарым!*

Тәү ҡарашҡа, Аҡмулланың ауаздары ишетелеп ҡала, шул уҡ ваҡытта шиғыр формаһында рифмаға, ритмға бик буйһоноп бармауы ла салына. Сафуан Яҡшыголовтың тәүге әҫәре ҡайҙа баҫылып сығыуы аныҡ ҡына билдәле түгел, әммә төбәктә уның яҙмалары телдән-телгә күсеп, ятланып та, һөйләнеп тә йөрөй. 1901 йылда Сафуан Яҡшыголов Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа хат аша тәбрик әҫәрен ебәргән. Ул

**_Быltыр "РФ Ер кодексына һәм айырым закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында" Федераль Закон ғәмәлгә инде. Уға ярашлы, илдең һәр гражданы ерле була ала. Белмәйем, беҙҙә был Закондан нисек ҡулланаларҙыр, әммә, әллә хоҡуҡи яҡтан белемебеҙ һаман юҡ самаһында, шатлыҡлы хәбәрҙәрҙән бигерәк зарлы тауыштар йышыраҡ ишетелә. Ә бына Ырымбур өлкәһендә йәшәгән милләттәштәребеҙ был Законды дөрөҫ файҙаланып ҡына ҡалмаған, ошо рәүешле боронғо башҡорт ерҙәрен үҙ ҡулына алған, ҡурсалау хәстәрен күргән. Шуныһы ҡыҙыҡлы: урындағы етәкселек тә ул ерҙәрҙе төбәк башҡорттарына биреү яғында._**

Башҡортостан Фәндәр академияһында һаҡлана. Ә инде ваҡытлы матбуғатта тәүге шиғыры иһә Ғабдулла Туҡай яҙмамы менән "Фекер" гәзитендә 1906 йылда донъя күрә. Икенсе "Яҙ килеүе" шиғыры Ырымбурҙа баҫылып сыға.

Бер-береһенә рухи терәк булып ижад иткән был осор әҙиптәренең яҙмаларына уртаҡ сифаттар хас: халыҡтың һыҙланыуҙары менән яныу, уларҙан сығыу юлын эҙләү, замандаштарҙа иман тәрбиәләү. Әммә Сафуан Яҡшыголовтың әҫәрҙәре ерлекле, тап ошо төбәк, ошо ҡәүемдең ошо дәүерҙәге проблемаларын сағылдырыуы менән

ра - ошо төбәкте ташлап китмәйенсә, ата-бабаларынан ҡалған нигеҙҙе һаҡлай, ауылдарын етем итмәй.

Былтыр "РФ Ер кодексына һәм айырым закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында" Федераль Закон ғәмәлгә инде. Уға ярашлы, илдең һәр гражданы ерле була ала. Белмәйем, беҙҙә был Закондан нисек ҡулланаларҙыр, әммә, әллә хоҡуҡи яҡтан белемебеҙ һаман юҡ самаһында, шатлыҡлы хәбәрҙәрҙән бигерәк зарлы тауыштар йышыраҡ ишетелә. Ә бына Ырымбур өлкәһендә йәшәгән милләттәштәребеҙ был Законды дөрөҫ файҙаланып ҡына ҡалмаған, ошо рәүешле боронғо башҡорт ерҙәрен үҙ ҡулына алған, ҡурсалау хәстәрен күргән. Шуныһы ҡыҙыҡлы: урындағы етәкселек тә ул ерҙәрҙе төбәк башҡорттарына биреү яғында. Быны Ырымбур өлкәһенә командировкаға барған саҡта шәхси эшҡыуарҙар ауыҙынан ишеттем. Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте менән башҡарылған

һөйләйбеҙ. Ғөмүмән, проблема тураһында түгел, уны нисек, ниндәй юл менән сисергә мөмкин - ана шул хаҡта фекер алышыу файҙалыраҡ булмаҫмы? Әгәр яңылышһам, әйҙәгеҙ, бәхәсләшәйек.

*Башҡорт зыялыһы - иң ҡыҙыҡлы тема!*
*Был заман инҡилабы ниндәй ҡыҙыҡ,*
*Күҙ асып ҡараһағыҙ, башҡорттарым.*
*Һәр бер милләт мәғарифә чалышалар,*
*Һеҙҙәр ғафил ятаһыҙ, башҡорттарым*
("Башҡорт ағаларына хитап").

О, был инде - иң ҡыҙыҡлы, иң көнүҙәк тема, минеңсә. Беҙҙең ижад әһелдәре - һәр береһе даһи, һәр береһе мәңгелек мираҫ ҡалдыра. Улар трибуналарға менеп, халыҡтың рухһыҙлығы, гәзит-журнал тиражының кәмеүе, башҡорт мәктәптәренең ябылыуы, туған тел дәрестәренең бөтөрөлөүе хаҡында йөрәк һыҙланыуҙарын еткерә. Тик әйтегеҙ әле, зинһар өсөн, халыҡты рухһыҙ тип әйтергә беҙҙең ни хаҡыбыҙ бар? Төбәктәрҙә йәшәгән милләтебеҙ вәкилдәре рух һағында тора! Уларҙы гәзит-журналға яҙылмауҙа, китаптарыбыҙҙы һатып алмауҙа ғәйепләрҙән алда, зыялыларыбыҙҙың почта йәшнигенә, китап кәштәһенә күҙ һалыу ҙа етә. Уҡый беҙҙе йәштәребеҙ ҙә, өлкәндәр ҙә, урта быуын да, тик социаль селтәрҙәрҙә, интернет селтәрендәге сайттарҙа. Был да - үҙенә күрә заман талабы һәм күренеше, тимәк, ошо юл менән дә рухиәтте зауыҡ тәрбиәләү эшен дауам итергә кәрәктер, моғайын. Ә гәзит алдырмайҙар, башҡорт китаптары һатылмай ята, тип зар иламаһаҡ та була. "Башҡортостан" гәзитенең генә түгел, "Ағиҙел" журналының тиражы өсөн дә зыялылар яуаплы. Һәр бе-

✓ *Әммә булған бит һәм бар шундай шәхестәр - улар өсөн илдәге идеология, түрәләрҙең алышыныуы, рухи инаныстарҙың үҙгәреүе мөһим түгел. Уларҙың үҙәктәге маҡсаттары, терәүҙәре ныҡ, бер ниндәй заман еле лә һындыра алмай.*



ребеҙ үҙебеҙҙән башлаһаҡ ине үрнәк күрһәтеүҙе. Өлгө алырлыҡ шәхестәребеҙ тураһында баҫмабыҙҙа әленән-әле яҙып торабыҙ. Тик... Был ғына аҙ.

Тираж хаҡында һүҙ сыҡһа, төрлө мәрәкә хәлдәр ҙә булғылай. Мәҫәлән, бер яҙыусыбыҙ нимә ти: "Мәҡәлә ебәреп ҡараным да, баҫманығыҙ бит, нинә минең яҙмам донъя күрмәгән гәзитте алдырырға тейеш әле мин?" Икенсе миҫал: "Телефондан бер хеҙмәткәрегеҙ һорауыма аныҡ ҡына яуап бирмәне лә, хәтерем ҡалды, гәзитегеҙгә яҙылмайым, үҙегеҙгә булһын "Башҡортостан"ығыҙ!" Ярай, үҙебеҙгә булһын һуң!

Өсөнсө миҫал: "Шул шағирҙың шиғырҙарын баҫтырҙығыҙ. Уның яҙғанын сығарып ултырған гәзит минә нимәгә? Кимәлегеҙ хаҡында әйтер инем инде!.." Беткә үс итеп, тун яғыу була түгелме һуң, йәмәғәт? Хәйер, Сафуан Яҡшығолов теге быуат башында уҡ был хаҡта иҫкәрткән дә бит. Тик зыялыларыбыҙҙың тарҡаулығы, иҫкесә форматта фекерләүе бөгөн дә беҙҙең дөйөм тирмәндең эшен тотҡарлай. Зыялы һүҙе әллә зыянлы менән бер тамырҙанмы икән?..

### Емермәйсә лә төҙөп булмаймы икән?

Тыуған яҡтарымда булған бер хәл тураһында һөйләгем килә. Заманында Асылыкүл буйында ла таш ҡәбер-

*Ҡалдырҙыҡ ер һеҙгә,*
*йөрөһөндәр тиеп, рәхәт йәшәп,*
*Һеҙ ни яуаптар бирерһеҙ,*
*бабаңыҙ ҡәберен ашап*
*("Башҡорттарҙың боронғо ҡәберстанынан бер сада").*

Уйланырлыҡ урын бар ғына түгел, һаман шул бер үк тырмалар һәм шул уҡ ҡәүем балалары уға баҫа. Бәлки, был беҙҙең милли сифаттыр?..

### Бөтөн өмөт - йәштәрҙә

Һәр дәүер тап үҙенең йәштәренә, киләһе быуынға ҙур өмөт бағлай. Уларҙан көтә халыҡты алға әйҙәр фекерҙе, яңылыҡты. Сафуан Яҡшығолов та шундай уҡ мөрәжәғәт ташлай милләттең үҫентеләренә:

*Баҡыңыҙҙар! Иҫке тормош бик күңелһеҙ,*
*Милләтемеҙ организмы ҡалмыш хәлһеҙ.*
*Шул хәлһеҙлек ауырыуының дауаһыны,*
*Әй, йәштәр! Был көндән уҡ эҙләгеҙ һеҙ*
*("Йәшлек дәрте").*

Фекер башы йәнә зыялыларға барып төртөлә. Уларҙан йыш ҡына "йәштәр рухһыҙ, киләсәктәре юҡ, хәстәрһеҙ, уйһыҙ быуын үҫеп килә" тигән кеүегерәк һүҙҙәр ишетергә тура килә. Эйе, ундайҙары ла барҙыр, боронғо дәүерҙәрҙән алып йәштәргә зарланғандар, сөнки йәшлек - үҙе уҡ дыуамаллыҡ, ҡылыс болғау, ҡабыныуҙар, һүрелеүҙәр, төңөлөүҙәр, янынан ихтилалға күтәрелергә әҙер булған осор.

булараҡ һаҡланып ҡалыуы, башҡалар менән бер тиң үҫешкә өлгәшеүе юлын иң тәүҙә уҡыуҙа, аң-белем алыуҙа, мәғрифәтселеккә ынтылыуҙа, донъя мәҙәниәтен үҙләштереүҙә күрә. "Замандаш, бөгөн нисәнсе быуат ул?" тип һорағым килә хатта үҙемдән.

### Сирек быуатлыҡ үҙгәреш

Тап ошолай атала Сафуан Яҡшығоловтың бер шиғыры. Әҫәрҙә яттар баҫып алған Эткол ауылы хаҡында һүҙ бара, тимер юл үткәрелеү сәбәпле, ун-



власть вәкилдәре көн күрһәтмәй. Әҫәрҙәре баҫылмай. Өйөнә етем балалар алып тәрбиәләгән дин әһелен махсус рәүештә эскелектә ғәйепләп, ҡулынан муллалыҡ указын да тартып алалар. Шул килеш тә ул үҙенең инаныстарынан баш тармай, киреһенсә, Аллаһы Тәғәләнең берлеген һәм барлығын таныу менән бергә халыҡҡа яңы замандың ҡараштарын да еткерә, һайлаған юлынан баш тартмай, география, урыҫ теле, арифметика кеүек фәндәрҙән дә белем бирә. Хатта ул бер мәл: "Килер бер көн, иманлыларҙың абруйы тағы ла артыр, уларҙың һүҙе алға сығыр!" - тип әйткән. Ә инде әҫәрҙәрен баҫтырыу мөмкинлеге булмағас, үҙенең аралашыу, аң-белем таратыу кеүек күңел ихтыяждарын ул Дәүләкән баҙарына барып, шундағы халыҡҡа шиғырҙар һөйләп ҡандырған.

Шундай көмһетелеүҙәргә дусар булған данлыҡлы яҡташым. Әммә булған бит һәм бар шундай шәхестәр - улар өсөн илдәге идеология, түрәләрҙең алышыныуы, рухи инаныстарҙың үҙгәреүе мөһим түгел. Уларҙың үҙәктәге маҡсаттары, терәүҙәре ныҡ, бер ниндәй заман еле лә, дәүләт исеменән башҡаларҙы баҫырға тырышҡан ваҡ фекерлеләрҙең шыңшыуҙары ла һындыра алмай. Шиғыр яҙмай, милләттәштәре менән аралашмай тора алмаған шағир төбәк халҡы күңеленә тик яҡты орлоктар ғына сәсеп ҡалдырған. Бөгөн дә ауылдарҙа өлкән быуын вә-

# ТОҒРО СӘСӘН,

## Сафуан Яҡшығолов тураһында бер кәлимә

лектәр булған. Хатта Заятүләк менән Һыуһылыуҙың ятҡан ере лә (Балҡантауҙа, имеш) билдәле булған. Әммә заманалар менән бергә ҡәберлектәргә, ата-бабаларҙың яҡты хәтеренә мөнәсәбәт тә үҙгәргән.

Тыуған яҡҡа ҡайтҡанда Киров бүлексәһе тигән 20-30 йортло ҡатнаш халыҡлы бер ауылды үтеп китәбеҙ. Ул совет осоронда барлыҡҡа килгән. Был дәүерҙә халыҡты аң-белемгә әйҙәүҙә ҙур эштәр атҡарылғанын беләбеҙ. Шул уҡ ваҡытта күпме таш йорт, боронғо ҡәберлек юҡҡа сығарылған, уларҙағы бай мәғлүмәт тупланған кәшәнәләр емерелгән! Ошо Киров бүлексәһендәге ҡайһы бер кешеләр йорт нигеҙе итеп таш зыяраттан таш ташыған, имеш. Булыуы ла бик ихтимал. Ул кешеләр өсөн ошо ерҙә яралған эпостың баһаһы ла юҡ (данлыҡлы "Заятүләк менән Һыуһылыу" тап ошо ерҙә тыуған бит!). Нисек кенә булмаһын, боронғо архитектура ҡомартҡылары, ҡәберлектәр беҙгә тиклем йәшәгәндәр хаҡында бик күп мәғлүмәт һаҡлай. Аяҡ аҫтыбыҙҙағы Өфө-2 ҡаласығы тураһында мәшһүр археологыбыҙ Нияз Мәжитов нисәмә йыл саң ҡаҡты. Ағайыбыҙ уны юғалтмау өсөн бик күп дәлилдәр менән, табылған ҡомартҡылар нигеҙендә ғилми-ғәмәли конференциялар ойошторҙо, республика етәкселеге иғтибарын ошо мәсьәләгә йүнәлтте. Бындай күренештәр тураһында Сафуан Яҡшығолов бер быуат элек бына нимә тип оран һалып ҡалдырған:

*Фундаментка, тупһаларға*
*ташыбыҙҙы алалар,*
*Шуға беҙҙең рухыбыҙ рәнйей һеҙгә,*
*әй, балалар!*

Күптәребеҙҙең был мәле оҡшаш хатта. Әммә шул уҡ ҡыҙҙарҙы һәм егеттәрҙе донъяның алдыңғы юғары уҡыу йорттарында уҡытыуҙы, "кадрҙар барыһын да хәл итә" тигән цитатаға ярашлы, милли кадрҙарҙы төрлө өлкәләрҙә үҫтереүҙе, алмаштың белем кимәлен һәм даими тулыланып торған белгестәр батманын кем хәстәрләргә тейеш һуң? Быныһы инде - өлкәндәр һәм урта быуын иңенә төшкән изге бурыс. Сафуан Яҡшығолов та беҙгә мираҫ итеп ошо хаҡта әйтеп ҡалдырған булған да бит, әммә беҙҙең йыйындарыбыҙҙың күбеһе бер-беребеҙҙе маҡтап, миҙал, грамота таратып үтеп китә. Аныҡ ошо йыл, көн, проблема хаҡында сығыштар, һорауҙарға теүәл яуаптар талап итә заман. Тәү сиратта йәштәребеҙҙең белемен, эшле булыуын хәстәрләүҙән башланырға тейеш түгелме икән беҙҙең рухи мәжлестәр?

Сафуан Яҡшығолов та капитализм нығынған, Рәсәйҙә киңерәк йәйелә барған осорҙа башҡорттарҙың милләт

да тормоштоң тотошлайы менән үҙгәреүе хаҡында бәйән ителә. Әйткәндәй, Дәүләкәндең элекке атамаһы ла - Эткол. Юҡҡа ғына мәҡәләнең аҙағына ҡалдырманым был әҫәр хаҡында һүҙҙе. Беренсенән, ул һүҙ рәссамы С. Яҡшығоловты замана йырсыһы итеп күрһәтһә, икенсенән, Яңы Яппарҙа йәшәп,

***Бөгөн дә ауылдарҙа өлкән быуын вәкилдәре, йә уларҙың балалары ошо уҡ өсөн генә таныш берәй йыр башҡарһа, "Сафуан мулла йыры", "Сафуан хәҙрәттең шиғыры", тип әйтеп ҡуя. Телдән-телгә күсә торған рухи мираҫҡа мөнәсәбәт ана шулай сағыла, шәхестәренә булған йөрәк түрендәге иң изге урынды башҡа бер кем дә биләй алмауына асыҡ дәлил дә ул. Шәхестең байтаҡ әҫәре төбәктең фольклоры иҫәбенә инеп киткәндер ҙә, моғайын, сөнки районда халыҡ ижадын өйрәнеүселәр шағир тарафынан яҙылған бәйет, ҡобайыр, йырҙарҙы Сафуан хәҙрәт яҙмаһы, йәки халыҡ ижады тамғаһы менән теркәгән. Әгәр яҙғандарың халыҡтыҡына әйләнә икән - ошонан да ҙурыраҡ баһа булыуы мөмкинме яҙыусыға!***

ошо Эткол ауылына йөрөп ғүмеренең һуңғы көндәрен табан атлай шәхес. Уның ошо йылдарҙа күргән михнәттәре хаҡында халыҡ араһында бөгөн дә илатырлыҡ тарихтар һөйләнелә.

Яңылыҡты, яҡты идеяларҙы алға һөргән мулланы совет власы бөтөнләй танымай ғына түгел, төрлө ялыу менән яфалай, кешелек сифаттарынан көлә. "1917 Октябрь инҡилабының байрамы мөнәсәбәте илә" шиғырының исеме генә лә уның рухи шатлығы тураһында һөйләп торһа ла, 25 йәшендә мәҙрәсә тамамлап, балаларға донъяуи фәндәрҙән дә белем биргән муллаға урындағы

килдәре, йә уларҙың балалары ошо уҡ өсөн генә таныш берәй йыр башҡарһа, "Сафуан мулла йыры", "Сафуан хәҙрәттең шиғыры", тип әйтеп ҡуя. Телдән-телгә күсә торған рухи мираҫҡа мөнәсәбәт ана шулай сағыла, шәхестәренә булған йөрәк түрендәге иң изге урынды башҡа бер кем дә биләй алмауына асыҡ дәлил дә ул. Шәхестең байтаҡ әҫәре төбәктең фольклоры иҫәбенә инеп киткәндер ҙә, моғайын, сөнки районда халыҡ ижадын өйрәнеүселәр шағир тарафынан яҙылған бәйет, ҡобайыр, йырҙарҙы Сафуан хәҙрәт яҙмаһы, йәки халыҡ ижады тамғаһы менән теркәгән. Әгәр яҙғандарың халыҡтыҡына әйләнә икән - ошонан да ҙурыраҡ баһа булыуы мөмкинме яҙыусыға! Аллаһы Тәғәлә ҡабул ҡылһын Сафуан хәҙрәт Яҡшығоловтың халҡы мәнфәғәтендә башҡарған изге эштәрен, тип яҙа алам мин бөгөн. Тимәк, ул әйткән иманлылар заманы еткән!

Дәүләкән районында йәшәгән күренекле татар яҙыусыһы Әмирхан Еникизың яҙмаларында ла уның хаҡында хәтирәләр бар тинеләр. Әммә ваҡытым етмәй ҡалды уларҙы ла эҙләп табырға. Киләсәктә башҡарылыр был эш тә. Сафуан Яҡшығоловты асаһы ла асаһы әле беҙгә. Әгәр ошбу олуғ шәхескә ҡарата күңелегеҙҙә ихтирам, йәлләү ҡатыш ҡыҙыҡһыныу уята алһам, ҡәүемемдең рухи мираҫын тулыландырыуға бер өлөш индерҙем, тип иҫәпләй алыр инем.

**Әйткәндәй, химиктар, механиктар, инженерҙар беҙгә бөгөн дә бик кәрәк! Эйе, ниҙер эшләйбеҙ, тырышабыҙ ҙа кеүек, әммә яй, бик аҡрын ҡуҙғалабыҙ! Ә заман беҙҙән етеҙлек, дәүер толпарынан түңкәрелеп төшөп ҡалмауҙы көтә…**

Лариса АБДУЛЛИНА.

***✓ Хирург аптырағандай булдымы, һынап ҡарай биреп торҙо. Юҡ, тойолманы, аңғарҙы Булат, һиҙҙе уның күҙ ҡарашындағы үҙгәреште. Тик ниңә ҡаушаны ул, көтөлмәгән хәбәргәме әллә был эшкә Булаттың ҡатнашлығынамы?***




Аҙаҡ был үткер малай менән әллә ни яйлап аралаша алманы. Һуңғы ваҡытта ҡарауыл нөктәләрендәге һалдаттарҙы сүпләүсе ниндәйҙер серле снайпер килеп сыҡты ла, бар көстө шуны аулауға ташландылар. Хәҙер Булаттар көнө-төнө сиратлап һунарға сығыр, эргә-тирә урман-тауҙарҙы һөҙөр, прицел торбаһынан сәғәттәр буйы ҡарауыл пункттарын күҙәтер булып китте. Ике ай этләне уларҙы был күҙгә күренмәҫ снайпер, ике ай һалдаттарға төн йоҡоһо, йүнле тамаҡ туйҙырыу эләкмәне. Өсөнсө ай тигәндә саҡ эләктерҙе уны снайперҙар. Кейек шикелле итеп ағас башынан атып төшөргән, тулыһынса йөҙ-башын ураған был әҙәмде ихата уртаһына индереп һалғас, инде даны таралған серле снайперҙы күреп ҡалырға тип барыһы ла йыйылды. Йөҙөн асып ебәргәс иһә бер арауыҡ телһеҙ ҡалып торҙолар. Хатта күпте күргән командирҙар ҙа аңшая биреп текәлеп ҡалды. Ерҙә иҙерәп кенә йоҡлап ятҡандай булып уларҙың яратҡан етемәге Абулхай ята ине. Ышана алманы был хәлгә Булат.

- Иптәш командир, был малай йүнләп ата ла белмәй ине бит, яңылышлыҡ килеп сыҡманымы икән? - уның һорауын хуплаусылар табылды.

- Эйе шул, бала-саға, - тиештеләр.

- Юҡ, - тине малайға облава ойоштороусы төркөм башлығы. - Беҙ уны оҙаҡ күҙәттек, ышаныслы булһын өсөн алдан ҡороп ҡуйылған алдатҡыс сәпкә атҡанын көттөк, унан ғына алдыҡ. Был - һалҡын ҡанлы, оҫта снайпер - бәхәсһеҙ.

Шаңҡыуҙан һөйләшә алмаҫ халәткә инде Булат. Шул төн керпек ҡаҡмай уйланып сыҡты ла, иртән барып снайпер булыуҙан баш тартып рапорт яҙҙы. "Әхлаҡи һәм дини ҡанундарым мине кеше үлтереүҙән тыя" тип аңлатты егет ниәтен. Яҙмаһын ҡабул иттеләр, ҡарарбыҙ, хәл итербеҙ тип ебәрҙеләр ҙә, төндә дежурный аша офицерҙар казармаһына саҡыртып алдылар. Бына шунда күрһәттеләр уға "әхлаҡи һәм дини ҡанундарын". Биш-алты иҫерек ир ауыҙ-моронон ҡанға туҙҙырып иҫен юйғансы типкеләне. Шулай тикшерелде һалдаттың рапорты. Һуңынан ике аҙна лазаретта ҡан ярау итеп ятты - бөйөрҙәрен төйгөләгәндәр генә икән.

Эш бының менән генә бөтмәне әле. Һауығып сығыуына уны "армия сафтарында ил алдындағы бурыстарын үтәүҙән баш тарта" тип хәрби трибуналға ҡуйҙылар. Командир рәхимлек күрһәтеп, тикшереүҙән алда үҙе килеп "йәки төрмә йәки хеҙмәт" тигән шарт ҡуйғас, икенсеһен һайланы Булат. Бер бығауҙы икенсеһенә алмаштыра алмай ине ул. Хәйер, һайлау ҙа булманы инде. Ҡулына ҡабаттан прицеллы винтовка тоттторҙолар.

Бынан ары тау-таш, йорт-ҡыйыҡтар өлөшө булып ултырыр, лупалы күҙ аша ҡорбандарын күҙләр аҙналар, айҙар һөйрәлеп барған яралы тиҙлегендә өҫтөрәлә торҙо, бәгерҙәр ҡата, хис-тойғолар үлә барҙы. Яйлап ваҡыт йәш һалдаттарҙан андары томанланған үлтереүселәр яһаны.

Бер аҙҙан егеттәр инде бомбалар өҙгөләгән иптәштәрен йыйып алып килгәндә лә, ҡара күмер генә ҡалған кәүҙәләрҙе табуттарға һалып оҙатҡанда ла, ҡатын-ҡыҙын, бала-сағаһын сыр-сыулатып ауыл-ҡалаларҙы ут эсендә тотҡанда ла күҙ бәбәген сылатманы. Хатта ҡулға алынып айҙан ашыу баҙҙа тотолған ике снайпер украин ҡыҙын йөҙәр һумға һатып йөрөгәндәрендә лә артыҡ иҫе китмәне Булаттың. Бахырҙарҙың ҡарар ере ҡалмай туҡмалғандар, нәжестәре менән бер соҡорҙа ултырғандан һаҫығандар, әллә баҙ һалҡынынан әллә ҡурҡыуҙан дер-дер ҡалтырайҙар ине. "Нимә етмәгән был бисәләргә? Эҙләгәндәрен тапҡандар" тип йәне көйҙө генә - йәлләмәне. Ә инде юғалған улдарын эҙләп килеп офицерҙар корпусында тоҡталған ҡатындар ишеген төндә иҫерек офицерҙар емерә башлағас, был асыу унда ниндәйҙер тыйып тотҡоһоҙ үс менән алмашынды. Винтовкаһын алды ла шул яҡҡа йүгерҙе, уға бер нисә егет эйәрҙе. Барып етһәләр аяҡтарында саҡ баҫып торған ҡәбәхәттәр эстән баррикадаланып өлгөрөлгән ишекте аса алмай маташа.

- Китегеҙ бынан! - тип ҡыскырҙы Булат етер-етмәҫтән. - Беренсе ингәнде атып йығам!

Ҡыҙып алған дүрт офицер ҡайҡайышып боролоп ҡараһа, арттарында бер төркөм снайперҙар ҡорал төбәп баҫып тора.

- Трибунал! Отставить! - тип һөрәнләп ҡараһалар ҙа, байғоштар хәлдең айышына тиҙ төшөндө. Бер килке үгеҙҙәр ише ҡараштар менән һөҙөшөп торғас, офицерҙар һуғыш яланын ташлап китте. Ҡайтып байрамдарын артабан дауам итте улар. Һалдаттар иһә ҡатындар ултырған бүлмәне таңғаса алмашлап ҡарауыллап сыҡты. Иртәнсәк был хаҡта иҫләүсе булманымы, һәр хәлдә эште юллап йөрөүсе табылманы.

Хеҙмәтен тултырып ҡайтҡанда уның снайпер икәнлеген берәү ҙә белмәне, сер тота алмағандар тере килеш ҡайтып етә алмай ине. Чечендарҙың снайперҙарҙы икеләтә дошман күреп, эҙәрлекләп килеп ҡайҙа ла яҙаһын биререн беләләр. Шулай итеп Булат армиянан "миротворец" исеме күтәреп ҡайтты. Һорашҡандарға ла тыныслыҡ урынлаштырылған ерҙәрҙе эттәр ярҙамында бомбаларҙан таҙарттыҡ, тип кенә аңлатты.

Кешеләр тыңланы ла онотто. Тик бына үҙе генә онота алманы. Бәлки, эш хәтерҙә лә булмағандыр, бары элеккесә ҡәҙимге тормош алып бара алмай ине инде ул. Үткән ике йыл арауығындағы ваҡытта тормош уны, нишләптер, үҙ арбаһынан төшөрөп ҡалдырған, нимәләрҙер юйылған, онотолған, иҫтән сыҡҡан булып сыҡты. Кешеләр уны, ул әйләнә-тирәләгеләрҙе аңлай алманы. Апаһы "уҡыуыңды дауам ит" тип игәһә, уҡыуҙың фәтүәһен күрмәне. Эстән хатта үртәлеп "ана Абулхай өс класс менән дә барыһынан шәп атты әле" тип уйлаған саҡтары булды. Өйҙәгеләрҙең вәғәзенән ҡасып урманға сығып китте лә көндәр, ҡай саҡ төндәр буйы ла шунда ятты. Тынлыҡты тыңлап, уны һағалап өйрәнгән, был торош уның ҡанына һеңеп киткән икән. Тора-бара ошо хәле яйлап ҡатмарлашты, уйы менән ысынбарлығы буталды, йөрөй-йөрөй үҙенең ҡайҙалығын онотоп китеү осраҡтары йышайҙы. Йоҡларға ятһа, күҙ алдынан номерланған ҡорбандары үтте, улар егетте баҫтырҙы, быуҙы, саҡырҙы... Шуларҙы күрмәҫ, ишетмәҫ өсөн ятманы, йоҡоһоҙлоҡтан сәбәпһеҙгә ҡыҙҙы, енләнде, үҙ-үҙен тота алмай башланы. Сараһыҙҙан бер-ике рюмкалап эсә, эсһә бер аҙ тыныслана ине лә, тора-бара лаяҡыл иҫермәйенсә онотолмай, ә инде ул хәлдә әҙәм ышанмаҫ хәлдәр башҡара башланы. Дуҫтары ҡасып бөттө, туғандары биҙҙе, аралашманы. Янында бер апаһы, әлеге һаман да үҙен ҡорбан итер апаһы ғына ҡалды.

* * *

Булат Богдан Радионовичтың күҙ алдында булырға тырышты. Тағы ла бер аҙға ҡал тигән тәҡдимен көттө. Ул саҡта иркенләп йөрөргә була. Юғиһә, Сафия менән асыуланышҡас "Ҡайтам" тип әйтеп һалғайны бит.

Кискә ҡарайыраҡ санитар аша саҡыртып та алды табип һәм йомшаҡ ҡына итеп:

- Булатик, братишка, бына һине күҙәткән документтарҙы ҡарап ултырам да, белгестәр әлегә дауалауҙы өҙмәҫкә ҡуша бит әле, үҙең нисек уйлайһың? - тип өндәште.

Егеткә шул ғына кәрәк тә ине.

- Ҡушҡастар ҡушалар инде, ни хәл итәһең, - тигән булды төшөнкө генә.

- Һин улай уҡ бошонма әле, файҙа өсөн эшләнә бит, дауалауҙың сифаты булһын өсөн, аңлайһыңмы, братишка, - табип күҙлеген сисеп арыған күҙҙәрен ыуаланы. - Давай, иртәгә дарыуҙар артынан сығып елләнеп йөрөп кил. Софьяңа бүләк тә ҡара.

Был хәбәрҙән Булаттың ҡалын ҡаштары өҫкә һикерҙе. Табип көлдө генә:

- Еткерҙеләр инде. Хуплайым. Һинең йәштә булһам, ул ҡыҙға минең дә күҙ төшөр ине. Тик ҡара, уның хәле әлегә шәптән түгел.

- Сафия тигәндән, Богдан Радионович, бәлки, бер юлы бәпесенең кәүҙәһен дә алып ҡайтырмын.

Хирург ҡапыл ғына аптырағандай булдымы, һынап ҡарай биреп торҙо. Юҡ, тойолманы, аңғарҙы Булат, һиҙҙе уның күҙ ҡарашындағы үҙгәреште. Тик ниңә ҡаушаны ул, көтөлмәгән хәбәргәме әллә был эшкә Булаттың ҡатнашлығынамы?

- Ниңә һиңә үле кәүҙә?

- Миңә түгел дә, Сафия үҙебеҙсә күмешһәң, тигәйне.

- Ә-ә... Баланы бер клиника тикшереүгә алғайны, шылтыратманылар әле.

- Ә инеп белешеп сыҡһам...

- Уныһы һин башҡара алыр эш түгел, Булатик, ваҡыты еткәс килтерерҙәр - күмерһең.

"Һе, - тип уйланы йөк машинаһы кабинаһында елдергәндә Булат, - насар уйлағы ла килмәй бит әле, тик бөтөн был буталсыҡтарҙың нисек итеп осоноҫҡа ялғарға?"

Йөк тейәп бөткәс, санитарҙарға "Богдан Радионович рөхсәт итте" тип бүләк алыуҙы һылтау итеп айырылып китте лә, тегеләрҙән күҙ яҙҙырғас та квартал эстәренән боролоп Палычтың йортона ҡарай йүгерҙе. Тағы ла теге ваҡыттағы кеүек даһыр-доһор сабып килеп менеп ҡыңғырауға баҫты. Көттөрә биреп булһа ла таныш ҡатын асты.

- Һаумыһығыҙ! Таныйһығыҙмы?

- Таныйым да... Сергей Павлович ҡайтманы бит, йәш кеше, инде бөтөн ҡаланы тетеп эҙләп бөттөм, дауалаған табибын күреп һөйләштем, полицияға ғариза яҙҙым.

Булат шаҡ ҡатты:

- Шу-шунан?..

- Доктор дауаханан сығарылды тигән ҡағыҙҙарын күрһәтә, ҡалаға алып килгән кешеләр, уларҙың шаһиттары бар. Уйлап ҡараһаң, мин бит инде уны полиция аша ла беренсе тапҡыр ғына эҙләмәйем. Быға тиклем ауылдағы дуҫында эсеп ятҡан, берәҙәктәргә эйәреп китеп юғалған осраҡтары булғайны. Шуғалырмы береһе лә етдигә алмай, "ҡайтып төшөр" ти ҙә ҡуялар. Тик ниңәлер был юлы күңелем шомло...

Бер нәмә лә вәғәҙә итә алманы ҡатынға Булат. Бары тик өнһөҙ тыңлап торҙо ла, күңелһеҙ хушлашып китеп барырға мәжбүр булды. Подъездан сығыуға, ингәнендә эскәмйәлә тәмәке көйрәткән ир һикереп тороп артынан эйәрҙе. "Нимә кәрәк быға" тип уйлап өлгөрмәне, теге ҡыуып етеп йәнәш үк атланы. Улай ҙа булмай күптәнге танышылай хәбәр ҡуша:

- Палычты эҙләйһеңме?

Шып туҡтаны егет.

- Эйе! Ҡайҙа ул, беләһеңме әллә?!

- Ә һин уның кеме?

- Ну, дуҫы тип әйтәйек. Ә һин?

- Шулай уҡ тиергә була.

- Ҡарале, - Булаттың был файҙаһыҙ әҙәмгә йәне көйҙө, - әйтер һүҙең булмаһа башты ҡатырма, һинһеҙ ҙә ҡаңғырылған.

Ят әҙәм тағы бер аҙ эйәрә биреп барҙы ла, яңынан телгә килде:

- Һине лә Палычтың эҙһеҙ юғалыуы аптырата, шулай бит? Мине лә.

Булат тамам бынан ялҡып:

- Шунан?! Ары нимә? Икәүләшеп аптырашып тик торайыҡмы?! - тип екерҙе лә аҙымдарын ҡыҙыулатҡайны, теге еңенән эләктереп үк алды:

- Туҡтале, егет, ҡыҙмай тор, һөйләшер һүҙ бар.

- Ни хаҡында? Һин дә бит бер ни белмәйһең.

- Палычтың ҡайҙалығын әйтә алмаһам да унан башҡа нәмәләрҙе беләм. Аңлауымса, һиңә лә күп нәмә мәғлүм.

- Һөйлә улайһа.

- Бында түгел, оҙон хәбәр. Әйҙә, берәй кафеға инеп ултырайыҡ.

- Ваҡыт юҡ, көтөп торалар.

- Тағы ҡасан киләһең? Әйҙә һин ошо араларҙа ысҡынырға тырыш. Килгәс тә миңә шылтыратырһың...

- Телефон юҡ минең! - Булат был юҡлыҡтан үҙен кәм итеп тойоп тағы ҡыҙып китә яҙҙы. Килгәс тә кемдер телефонын сәлдерҙе шул, осона ла сығып булманы.

- Аңлашыла, был яҡ менән бөтөн бәйләнеште өҙәләр, тимәк. Улайһа автоматтан шылтыратырһың, тик был хаҡта берәүгә лә әйтмә, - тип бәйләнсек ир тәмәкеһе тышына арҡыс-торҡос һандар сыймаҡлап тотторҙо ла, бумажнигынан меңлек алып һуҙҙы, - ҡапылда кәрәк булыр.

Тәүгә осраған ете ят әҙәмдең уға былайтып аҡса тәҡдим итеп тороуы Булатты ғәрләндерҙе. Ҡаштарын төйөп аҡса һуҙған ҡулды этәреп ебәрҙе:

- Ал аҡсаңды! Хәйерсе тиһеңме әллә!

Ә тегеһе бер ни булмағандай артынан ялбара биреп ҡысҡырып ҡалды:

- Шылтырат, йәме! Номерҙы юғалтып ҡуйма! Онотма, был бик мөһим! Көтәм! Көтәм, дуҫ!

**(Дауамы бар).**

*Тормоштоң тарлығы - тема тарлығына, тема тарлығы әҫәрҙең фәҡирлегенә килтерә. Фәҡир әҫәрҙе бөгөнгө XXI быуат кешеһе уҡымай. Ул уның урынына интернеттан, йә булмаһа, телевизорҙан юҡ-бар нәмә ҡарай.*

ӘҘИП ҺҮҘЕ

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ менән беҙ, ғәҙәттә, төрлө темаларға аралашырға яратабыҙ. Ул бихисап һорауҙарға яуап табыусы, аҡыллы кәңәш биреүсе кеше. Әммә бер ҡасан да үҙ кәңәшен көсләп таҡмай, аҡһаҡалдарса һалҡын ҡанлылыҡ күрһәтә торған ағай. Билдәле шағир Тимер Әбдрәхим улы НИӘТШИН тураһында һүҙебеҙ. Бөгөн уға "Әҙәбиәт йылы ижадсыға нисек ярҙам итте?" тигән һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# ӘҘӘБИӘТ ЙЫЛЫНЫҢ ҺӨҘӨМТӘҺЕМЕ? ХӘРӘКӘТ БАШЛАНДЫ!

- Дөйөм алғанда, ижад донъяһы өс өлөштән: яҙыусынан, ул яҙған китаптан һәм китапты уҡыусынан тора, - тип башлап китте һүҙен ағайыбыҙ. - Шуға күрә, әгәр йыл махсус рәүештә "Әҙәбиәт йылы" тип аталған икән, ул йылда яҙыусыға ҡарата иғтибар артырға, әҙипте дәртләндереү буйынса эштәр ҙә әүҙемерәк атҡарылырға, уның һәйбәт китаптары йылдамыраҡ донъя күрергә, уҡыусыларға барып етергә, уҡыусыларҙың ул китапҡа булған мөнәсәбәте матбуғатта, киң мәғлүмәт сараларында йышыраҡ сағылдырылырға тейеш. Быларҙың барыһы ла тормошҡа ашмаһа ла, ҡайһы бер саралар күңелде йылытты. Әҙәби марафон, "Әҙәби нағыш" исеме аҫтында яҙыусылар менән осрашыуҙар, кисәләр үтеүе әҙипте, айырыуса йәш ҡәләм тибрәтеүселәрҙе халыҡҡа, уҡыусыға яҡынайтыу яғынан отошло булды. Был сараларҙа исеме билдәле яҙыусылар, айырыуса яҡташ яҙыусылар осрашыуҙарға ҡайтты. Йәштәрҙең, олораҡ йәштәге башлап яҙыусыларҙың ҡулъяҙмалары ошо билдәле яҙыусылар хөкөмөнә сығарылды. Башлап яҙыусылар иһә яҙыусыларҙан үҙенсәлекле фекер, хуплау, тәнҡит һүҙҙәре ишетә алды. Ҡайһы бер әҫәрҙәр йыл аҙағында үтәсәк йомғаҡлау йыйылышына тәҡдим ителде. Тимәк, былтыр яҙыусылар менән эшләү, яҙыусыларға булған иғтибар күҙгә күренеп артты.

Китап мәсьәләһенә килгәндә, һуңғы йылдарҙа беҙҙең төп нәшриәттә, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә, китап сығарыу мәсьәләһе киҫкен тора. Нәфис әҙәбиәт өлгөһө сығарыу йылдан-йыл ауырлаша. Уға бүленгән аҡсаның күләме лә шундай уҡ етеҙлектә кәмей. Шуға күрә, был өлкәлә ваҡиға булырлыҡ, халыҡ дәррәү хуплап ҡаршы алырлыҡ ниндәй яңы китап сығыуын әлегә әйтә алмайым. "Ағиҙел" журналында миңә оҡшаған әйберҙәр, әлбиттә, булды. Мәҫәлән, Тамара Искәндәриәнең "Тимер" поэмаһы матур яҙылған. Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе" трилогияһы... Тәүбәне автор нисек өс томға һыҙҙы икән? Ғөмүмән, әҙәбиәттә тәүбәләр күп кенә: Рәшит Солтангәрәевтың, Сергей Есениндың, Жан-Жак Руссоның, Лев Толстойҙың тәүбәләре бар. Бына хәҙер Флүр Ғәлимовтың тәүбәһен күрҙек. Флүрҙең темаһы ҡыҙыҡлы ғына. Яңы башҡорт - башҡорт мөхитенә килеп кергән яңы төшөнсә. Яңы баҙар шарттарындағы герой. "Аҙғын тәүбәһе" лә шул яҡҡа тартым. Исеменә күрә есеме, тигәндәй, урыҫтарҙың "Греши и покайся" тигән лозунгыһындағы һымаҡ, гонаһ яһайһың да, тәүбәгә киләһең, яһайһың да, тәүбә итәһең... "Аҙғын тәүбәһе" китап уҡыусыға шул яғы менән ҡыҙыҡлы булмаҡсы. Әммә, алдараҡ әйткәнемсә, был китап та уҡыусыға китап һатыу нөктәләре, сауҙа селтәре аша барып етә алмай интегә. Беҙҙең кибеттәрҙә, мәҫәлән, төбәктәге - Мәләүеҙҙәге, Күмертауҙағы, Салауаттағы китап магазиндарында, милли китаптар бик һирәк, сөнки кибет хужалары башҡорт китаптарын күмәртәләп алырға ҡурҡа. Алһа, һата алмай яфалана. Һатыр ҙа ине, беренсенән, халыҡ аҡсаһыҙ, икенсенән, китапты рекламалай белмәйбеҙ.

Ҡыҫҡаһы, Әҙәбиәт йылы тип, күҙгә күренерлек, ғорурланып, күккә күтәреп һөйләрлек саралар булмаһа ла, хәрәкәт башланды, тиергә була. Яҙыусылар яғынан да хәрәкәт бар. Улар шуны төшөнә: XXI быуатта үҙ мөйөшөңә генә һырылып, үҙ йырыңды ғына йырлап, уң яҡта, һул яҡта, теге милләттә, был милләттә нимә бар - шуны белмәйенсә, анализламайынса, заман геройҙарын тыуҙырмайынса, заман ағышының төп йүнәлештәрен белмәйенсә, йүнле китеп яҙып булмай. Павло Неровныйҙың бер һүҙе бар: "Кешене кеше итеү өсөн күпме хәл-ваҡиға ер юлдары буйлап, ваҡыт ағышында хәрәкәт итергә тейеш". Ә бит кешене яҙыусы итеү өсөн ул хәл-ваҡиғаларҙың хәрәкәте - тығыҙыраҡ, хәрәкәт үҙе - етеҙерәк, хәрәкәттең даирәһе, билгән юлдары - күберәк булырға тейеш. Ә яҙыусыларҙың бөгөнгө тормошо шуға алып барамы? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, алып бармай. Ауылдарға яҙыусыларҙы саҡырайым тиһәң, үҙе бер бәлә. Транспорты юҡ, ҡаршы алырға кешеһе юҡ, колхоз-совхозы - юҡ. Уларға хатта ҡайһы ваҡытта йылы аш ашатыу ҙа мөмкин булмай сыға. Был - сиселеш талап иткән мәсьәләләрҙең тағы береһе, әлбиттә. Әммә, нисек кенә булмаһын, был ауырлыҡтарҙы яҙыусы ла, уҡыусы ла, йәмғиәт тә еңеп сығырға тейеш.



Яңыраҡ "Культура" телеканалында 80-се йылдарҙа Сыңғыҙ Айтматовтың "Плаха" тигән китабы сығыуға ҡарата Мәскәүҙәге әҙиптәр йортонда үткән осрашыуҙы ҡабатлап күрһәттеләр. Мине аптыратҡаны шул булды: зал шығырым тулы. Тегенән дә тороп һорау бирәләр, бынан да... Халыҡ шул тиклем әҫәрҙе яҡшы аңлай, шул хәтлем тәрән һорауҙар бирә. Уҡығас, бирә инде, тиер кемдер... Уҡымаҫ ине, "Плаха"ла торғонлоҡ заманында халыҡ эҙләнгән, яуап тапмаған мәсьәләләр күтәрелде бит. Унда - тәбиғәт тә, изгелек тә, кешенең үҙ алдындағы яуаплылығы ла һәм башҡа мәсьәләләр ҙә бар. Һәммәһе лә художестволы образдар, характерҙар аша бирелә. Унда бүреләр тормошо ла бар тулылығында тасуирлана.

Тормоштоң тарлығы - тема тарлығына, тема тарлығы әҫәрҙең фәҡирлегенә килтерә. Фәҡир әҫәрҙе бөгөнгө XXI быуат кешеһе уҡымай. Ул уның урынына интернеттан, йә булмаһа, телевизорҙан юҡ-бар нәмә ҡарай, сөнки унда кешенең иң боронғо, элек-электән һалынған хис-тойғолары - һуғыш-ҡан ҡойош, аҡса һәм власть, мөхәббәт һәм енси мөнәсәбәттәр күтәрелә. Улар ябай, улар өҫтә ята - кеше шуға ынтыла, сөнки улар еңел ҡабул ителә. Ул, әлбиттә, һинең булмышыңдың төпкөлдәренә төшөп етмәй, әммә еңел ҡабул ителә. Баштағы ләззәтләнеү үҙәктәрен уята, уларҙы ваҡытлыса әүҙемләштерә, кешегә рәхәт һымаҡ. Әммә 5 минуттан һуң бөттө - осто-китте! Ошондай мәғлүмәт көҫәгән уҡыусыны ла тәрәнлегә менән тетрәтеп, уны үҙенә йәлеп алырлыҡ булырға тейеш бөгөнгө заман әҫәре...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# ҠАТЫНЫМДЫ ЯРАТЫУ...

## батырҙан бахыр итте

**Бынан бер нисә йыл элек урамда һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, бысраҡ сәстәре уҡмашып бумалаға оҡшаған, алама кейемле, бөтә мөлкәтен үҙе менән йөрөткән кешеләргә, йәғни асарбаҡтарға йәлләп тә, ерәнеп тә, аптырап та ҡарай инек. Ә хәҙер уларға бөтөнләй иғтибар итмәйбеҙ ҙә шикелле, һәр хәлдә, ундайҙар ҡулын һуҙып, хәйер һораған мәлдә күрмәмешкә һалышып үтеп китергә тырышабыҙ, сөнки был күренеш көндән-көн ғәҙәтигә әйләнә бара. Ҡайһы берҙә бер үк кешене йома булһа - мәсет, йәкшәмбелә сиркәү янында күрәбеҙ. Хәйер, түбәнлеккә төшкән кеше өсөн ниндәй дин кешеһе булыу мөһим дә түгелдер инде.**

Шулай ҙа бер көндө бер асарбаҡҡа иғтибар итмәй үтеп китә алманым. Ул тырышып-тырмашып сүп һауытын бутай ине. Контейнер тулы түгел, шуға күрә, бер ҡулы менән тотонған да, ярты кәүҙәһе менән сүп һауытына эйелгән, ә аяҡтары ергә теймәй, аҫылынып тора. Мин башта, был кеше берәй әйберен яңылыш ташлаған да, шуны эҙләйҙер, тип уйлағайным, әммә сүп һауытынан икмәк һәм кетчуп шешәһе һалынған полиэтилен тоҡсай алыуын күргәс, был уйымдан ҡайттым. Асарбаҡ тоҡсайын пакетына һалды ла, бысраҡ ҡулдары менән шешәнең ауыҙын һөртөп, уның төбөндәге помидор соусын һемерә башланы. Минең тексәйеп ҡарап торғанымды һиҙҙе, әлбиттә, ҡыҙыҡ күрепме, мыҫҡыл итеүе булдымы, шешәне миңә табан һуҙған кеүек булды.

Һөйләшеп киттек. Һөйләшеп, тиһәм, бәлки, бик үк дөрөҫ тә түгелдер, сөнки мин уға нисек ошо көнгә төшөүе тураһында бер генә һорау бирҙем.

Александр, мин уйлағанса, асарбаҡ түгел, сөнки был аббревиатура "билдәле йәшәү урыны юҡ" тигән мәғәнәне аңлата, ә уның әле даими йәшәгән урыны, пропискаһы, үҙ ҡыйығы бар. Һигеҙтуғыҙ йыл элек ҡатыны, ҡыҙы, ейәне менән өс бүлмәле иркен фатирҙа йәшәгән. Әле лә бар улар, тик уның менән бергә түгелдәр. Хәҙер Александр яңғыҙы. Япа-яңғыҙ түгел, дүрт бесәйе бар. Ҡышын уларҙың һаны ике-өс тапҡырға арта. Урамда ҡайҙа барырға белмәй йөрөгән бесәйҙәрҙең бөтәһен дә үҙенә алып ҡайта.

Бәхетһеҙлек бер-бер артлы килә уға. Һәм ул бәхетһеҙлеген ҡатынынан, ә дөрөҫөрәге, уға булған мөхәббәтенән күрә.

- Көнө-төнө эшләп, көрәп аҡса алғанда ла ярай алманым уға. Бер ваҡытта ла ҡәнәғәт булманы, һәр ваҡыт нимәлер етмәй төҫлө ине,- ти асарбаҡ.

Александр әйтеүенсә, ҡатынының йәмерәйеп ултырғанын күрмәҫ өсөн ул эштән һуң да ҡалып эшләй, ял көндәрендә лә өҫтәмә эш таба. Өҙлөкһөҙ эштә булғас, берҙән-бер ҡыҙының да үҫкәнен һиҙмәй. Ҡыҙы иһә атаһын "аҡса табыусы" тип кенә ҡабул итә. Ғаиләлә бәхетһеҙ икәнлеген белһә лә, Александр айырылышыу тураһында уйлап та ҡарамай. Сираттағы ялланып эшләгәнендә һул ҡулының бармаҡтарын өҙҙөрә. Ҡулы ғәрипләнеп, эшһеҙ ҡалғас, ҡатыны бөтөнләй дошман күрә уны, өйгә һыйҙырмай, яҡты йөҙ күрһәтмәй, хатта тик торғандан ҡул күтәрә, туҡмай, өйҙән ҡыуа башлай.

- Ҡатынымдың ҡатылығын үҙемдең йомшаҡлығымдан күрәм, - ти Александр йәшермәй. - Уны үтә ныҡ яраттым. Өрмәгән ергә ултыртманым. Бөтә хаталарын, яңылышыуҙарын ғәфү иттем. Йөҙөндә бер йылмайыу, ҡәнәғәтләнеү күреү өсөн әллә нәмәләр эшләргә әҙер инем. Ҡыҙым тыуған йылды күлдән томбойоҡ сәскәһе алып бирәм тип, саҡ һаҙлыҡ төбөнә китмәнем. Мөхәббәтем харап итте инде. Батырҙан бахыр яһаны...

Бынан һигеҙ йыл элек ҡаты ауырып, дауаханала ятып сығыуына айырылышыу тураһында судҡа ғариза бирелгән, өс бүлмәле фатирҙы һатыу хәл ителгән була. Шулай итеп, ул иҫке йортта бер бүлмәле фатирға күсә.

Шунда ла ул ҡатынына ҡаршы килә алмай, ҡасан булһа ла яңылышҡанын аңлар, йәлләр, яңынан бергә йәшәргә саҡырыр тип көтә. Урам буйлап сүп-сар тирәһендә йөрөй башлауы ла үҙен ҡатынынан йәлләтеү маҡсатынан килеп сыға. Һуңынан инде был кәсепкә ныҡлап өйрәнеп китә: бесәйҙәре өсөн дә аҙыҡ-түлек күп була унда, үҙенә лә кәрәк-яраҡ табыла. Пенсия йәшенә етмәгән, ә инвалидлыҡ пенсияһы коммуналь хеҙмәткә, дарыуға саҡсаҡ етеп ҡала. Шунлыҡтан, туҡланыу, кейенеү мәсьәләһен ул ошо сүп һауыттары тирәһендә хәл итә.

- Кеше бөгөн насар йәшәмәй, тоҡлап аҙыҡ-түлеген ташлай, кисә алған икмәген бөгөн ашамай, шкафында урын булмағас, бына тигән кейем-һалымын сығарып ташлай, - ти Александр. - Минең хаҡта яҙһаң, шуны ла яҙып үтерһең әле, ир-егеттәргә генә әйтер һүҙем бар. Ҡатындарын яратҡанда үҙҙәрен дә онотмаһындар ине. Юғиһә, минең кеүек, тишек кәмәлә ҡалыуҙары ихтимал...

Һуңғы һүҙҙәрен әйтте лә, ҡапыл ғына китеп барҙы. Бәлки, ағырға торған күҙ йәштәрен күрһәтергә теләмәгәндер. Бәлки, был ҡылығы, һин дә ҡатын-ҡыҙ затынан бит инде, тип, үҙенсә протест белдереүе булғандыр...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

✓ Ошо ҡондоҙҙар быуа быуып, һыу запаслап, бәлки, йылғаны ҡороп бөтөүҙән ҡотҡарыр: быуала һыу самалап ҡына ағыҙыла бит. Ҡондоҙҙар ишәйеп китеп, быуалар күбәйһә, йылғаның хәле бермә-бер яҡшырыр ине.



ИНТЕРНЕТТАН

# КҮҘҘӘРЕНДӘ...
## нимә сағыла?

■ Америка ғалимдары раҫлауынса, бәләкәй генә сағынан даими рәүештә телевизор ҡараған балалар йәше тулған мәленән үк үсеш буйынса тиҫтерҙәренән ҡалыша башлай. Тайпылыштар психик йәһәттән һәм аҡыл үсешендә күҙәтелгән. Белгестәр 259 ғаиләне тикшергәндән һуң бындай һығымтаға килгән. Бигерәк тә өлкәндәр өсөн тәғәйенләнгән тапшырыуҙар зыян килтерә. Мәҫәлән, бала һөйләшмәүе ихтимал, сөнки ата-әсә уның менән тейешенсә шөғөлләнмәй. Иң ҡыҙығы, был факт ғаиләнең түбән йә юғары килемле булыуына ҡарамай. Ғөмүмән, тәүге ике йылда бала өсөн телевизор мәғлүмәт биреүсе функцияһы үтәмәй. Киреһенсә, ул баланың аҡылын үҫтереүгә зыян һалә. Хатта балалар өсөн махсус тәғәйенләнгән тапшырыуҙар ҙа хәлде ҡотҡара алмай. Шуға ла балағыҙ үҙ йәшенә күрә дөрөҫ үҫешһен өсөн уның менән бергә телевизор ҡарамағыҙ, ә уның менән аралашығыҙ, ти ғалимдар.

■ Күҙҙәр - күңел көҙгөһө тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Кешенең хис-тойғоһо күҙҙәрҙә сағыла. Кемдеңдер ҡарашы асыҡ, яғымлы, кемдер ауыр ҡарашлы. Күҙҙәр - кешенең эске донъяһын да сағылдыра. Күреү һәләте психика менән бәйле, ти ғалимдар. Германияла психосоматика офтальмологияһына нигеҙ һалыусы доктор Вольфганг Шульц-Цеден әйтеүенсә, күҙ ауырыуҙарының 40 процентының психологик нигеҙе бар. Мәҫәлән, кеше ҡурҡҡанда уның күҙ ҡараһы ҙурая, асыуланғанда, киреһенсә, ҡыҫыла. Ныҡ тулҡынланғанда күҙ ҡараһы киңәйә, күреү һәләте түбәнәйә. Кеше тынысланғас та күреү һәләте кире ҡайта. Күҙҙәргә иң ҙур зыянды ҡурҡыу тойғоһо килтерә. Ул ҡан баҫымы һәм күҙ эсе баҫымы күтәрә, әгәр был хис гел ҡабатланып торһа, глаукома барлыҡҡа килеүе бар. Эске конфликт, тойғоларҙы "баҫыу" - күреү һәләте насарайыуының төп сәбәптәре. Был организмдың һаҡланыу реакцияһы.

■ Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда күпкә хислерәк, тип белдерә Вашингтон университеты менән Джорж Мейсон университеты белгестәре. Һәр хәлдә, беренсе ҡараштан улар йышыраҡ ғашиҡ була, тип раҫлай улар. Тәрлө илдәрҙә йәшәгән 70 мең кешенән һорау алғандан һуң, улар тап ир-егеттәрҙең көтөлмәгән ярһыулыҡҡа һәләтле икәне асыҡланған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы ир-аттарҙың 48 проценты тәү ҡараштан ғашиҡ булған, ҡатын-ҡыҙҙар араһында бындайҙар иҫәбе 28 процент ҡына. Ир-егеттәр яратҡан кешеһенә йышыраҡ хыянат та итә, ситкә йөрөүселәр һаны улар араһында 33 процент, ҡатын-ҡыҙҙарҙа - 19.

■ Алтын менән борондан дауаланғандар. Алтын һәм уның ҡушылмаларынан яһалған препараттар туберкулез, тирене, периферик нервы системаһын, күҙҙе һәм ҡайһы бер эске ағзаларҙы зарарлаусы проказа сирен, ҡыҙыл сөсә ауырыуын дауалай. Алтын, алтындың көмөш менән аҡ алтын ҡушылмаһынан биҙәүестәр тағыу истерия, депрессия, эпилепсиянан ярҙам итә, тип иҫәпләнә, сөнки кешене тынысландыра, кәйефен яҡшырта. Алтын шешеүгә, микробтарға, бактерияларға ҡаршы ҡулланыла, аллергия булдырмай. Шуға ла киҙеү эпидемияһы ваҡытында алтын биҙәүестәр тағырға кәңәш итәләр. Алтын шулай уҡ ҡан баҫымын түбәнәйтә, матдәләр алмашыныуын, ҡан әйләнешен яҡшырта.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# КЕСЕ ТУҒАНДАРЫБЫҘ...
## тәбиғәтте афәттән ҡотҡармаҡсымы?



### Ҡондоҙҙар кеше һымаҡ...

Быуаның һул яҡ ҡанаты тау битләүенә етеп туҡтаған. Һыу ситенә яҡын килеп сүгәләп ултырҙым да, ентекләп быуа стенаһын күҙәтә башланым. Бик тә аҡыллы эшләнгән ул, кеше ҡулы менән башҡарылған кеүек. Ләкин әҙәм балаһы быуаны икенсе төрләрәк эшләй торғайны. Билдәле бер аралыҡта ҡаҙыҡ ослап ҡағып сығаралар һәм талдан йыш итеп ситән үрәләр. Быуа стенаһы уртаһында ярыҡ ҡалдыралар ҙа, шунда мурҙа һалалар. Ҡондоҙҙоң ҡаҙыҡ осларға һәм ҡағырға балтаһы юҡ бит инде. Ләкин бик еңел юлын тапҡан. Ул да кеше һымаҡ талдан йыш итеп ситән үргән. Һыу ағышы аҫтына мөйөш яһап урынлаштырылған. Ситәндең бер осо һыуҙан сығып тора, икенсеһе ләм, тупраҡ менән баҫтырылған. Күрәһең, каналдарҙы таҙартҡанда сыҡҡан ләм, балсыҡты ошо ситән өҫтөнә өйгәндәр. Ситәндең 20-30 сантиметр самаһы ғына осо күренә, ҡалғаны ләм аҫтында. Күренмәгән яҫылыҡ күпме икәнлеген тикшерергә ҡурҡтым, быуа йырылып ҡуйыуы бар. Шулай итеп, ситәндең тупраҡ һәм һыу ауырлығы менән баҫтырылған өләшә бирешерлек түгел, ныҡлы тойола ине. Үрелгән ситән ярыҡтарына үләң, япраҡ ҡыҫтырғандар, өҫтөн ләм менән һылағандар. Тәрән һыу үткәлығының артыҡ һыуы тәпәш кенә булып күренеп торған быуа стенаһы аша һарҡып ҡына ағып ята ине. Үҙенсә мини-шарлауыҡ. Һоро Өкө яҙмаһындағы быуаның уртаһында артыҡ һыуҙы ағыҙа торған улағы була. Был быуала ул күренмәй, сөнки урталыҡ ер байтаҡ алыҫ, күрерлек түгел. Бында ла булғандыр, йәй һыу ситән өҫтөнән аҡһа ла, ҡыш боҙ тунғас, артыҡ һыуға барыбер улаҡ кәрәк. Ғөмүмән, һәр быуаның рельефка ҡарап, үҙ нескәлектәре буладыр.

Киләһе йылына, бесән бөткәс, ҡондоҙ быуаһын күрергә тағы киттек. Быуаға етергә 200 метр самаһы ҡалғас, ҡапыл "гөрҫ" итеп ағас ҡоланы. Аптыраныҡ: тыныс ҡына елһеҙ көн, ә ағас ҡолай. Тауыш ишетелгән яҡҡа юлландыҡ. Ерҙе күҙәтеп барам: уң яҡта элеккесә тау бите, һул яҡта тауҙан алыҫлашып, уңға тартҡан дуға кеүек тәбиғи вал һуҙылған. Вал аҫтында тәрән, балсығына тиклем йыуылған яҙғы йырҙа уң яҡтағы йәйге йырҙаға барып ҡушыла. Ошо ҡушылған ерҙә ҡондоҙҙар быуа төҙөй башлаған. Тирә-яҡты ентекләп ҡарап сыҡҡас, шуға инандым: быуа төҙөү өсөн ысынлап та бик ҡулай урын. Быуылған ерҙән өҫтәрәк ике йырҙа араһы - тәбиғи ҡалҡыулыҡ. Ҡондоҙ өйө, үрҙәге ҡондоҙҙарҙыҡы кеүек, быуаһы һыу менән тулғас, яҫы һыу яткылығы уртаһында ҡаласаҡ. Үрҙәге быуа ҡондоҙҙары бала үҫтереп, башҡа сығарғандарҙыр, тип уйлап ҡуйҙым. Тағы бер мөғжизә буласаҡ, тип уйлап, алға атланыҡ.

Аҫҡы быуа бәләкәй ине әле, һыуы ла әҙ. Буласаҡ быуа урынындағы ағастар ҙа иҫән ултыра, каналдарҙы ла таҙартырға кәрәк, күпме эш!.. Үҙҙәре ҡайҙа йәшенеп йөрөйҙәр икән, өйҙәрен дә эшләй башламағандар, тип борсолоп, әрәмә араһындағы һыйыр һуҡмағы буйлап үргә киттек. Шуныһы ҡыҙыҡ: элек йылға тәрән ярлы йырҙанан аҡҡас, малдар һыу эсә алырлыҡ ер юҡ ине. Ә хәҙер, быуа һыуы тау битләүенә килеп терәлгәс, әйҙә, рәхәтләнеп эс. Шуға ла бында малдар һуҡмаҡ һалған.

Өҫкө быуа эргәһенә килгәс, саҡ танының быны - иҫ киткес үҙгәргән. Талдан үрелгән быуа ситәне ләм аҫтында тамыр ебәреп, ҡуйы булып ужымлап үҫә башлаған. Ун сантиметр тирәһе оҙонлоҡтағы йәш тал үҫентеләре стена булып тауҙан-тауға һуҙылған. Был талдар көслө тамыр ебәреп, һыу төбөнә йәбешһә, өҫтәүенә йыуанайһа, ниндәй ныҡлы стена буласаҡ! Ул ғына ла түгел: киләсәк йылдар өсөн күпме аҙыҡ запасы бит ул! Киләсәкте ҡайғыртып эшләнгән эш был. Сөнки йылға үҙәнендәге талдар иҫәпле генә.

Ҡондоҙ өйө тәүге йылда асыҡ ағас өйөмө булып күренеп ултырһа, быйыл күренмәй - ҡуйы таллыҡ ҡаплаған. Күрәһең, ҡырҡҡан талдары ла, өйөлгән йыуан тал бүрәнәләре лә һыу эсендә булғас, тамыр ебәреп үҫә башлаған. Быуа өҫтө лә үҙгәргән. Тәүге йылдарҙа өй тирәләй һыу өҫтө асыҡ ине, хәҙер үлән баҫҡан: йәй буйына ашарлыҡ аҙыҡ запасы бит был! Йәй ашарға үләне, ҡыш туҡланырға талы бар. Баҡса яһап, сәсеп үҫтергәнгә оҡшаған. Ике яҡтағы каналдар ғына күм-күк булып, саҡ ҡына беленеп ята. Тимәк, ҡондоҙ өйө лә, быуаһы ла тәбиғи рәүештә нығытылған, йылдан-йыл тағы ла нығыясаҡ.

Бер нисә йылдан ни булырын күҙ алдына килтерәйек: быуа стенаһы талдары аҙыҡ запасы булыр, ҡырҙан ташырға түгел. Һыу төбөнә тамыр ебәргән талдан торған стенаның ныҡлығын әйтеп тә тормайым: һәр төрлө йырылыуҙан һаҡлаясаҡ. Өй өҫтөндәге ағас өйөмө лә үтәнән-үтә тере ағастар менән тегелһә, бер ниндәй йыртҡыс та өйөмдө емерә алмаясаҡ. Оҙаҡ йылдарҙа иҫәп тотоп ҡора белгән ҡондоҙҙар үҙ тормошон. Шунан әйт инде аҡылһыҙ мәхлүк тип. Һоро Өкө ҡондоҙҙарҙы Кесе туғандар тип юҡҡа ғына атамағандыр. Аҡыллы хеҙмәтенә ҡарап, уларҙы яҙыусы кешегә оҡшатҡан.

Быуа стенаһынан канал буйлап үргәрәк күтәрелдем: тәүге йыл унда самаүыр йыуанлығы бер нисә уҫаҡты канал өҫтөнә йыҡҡайнылар. Ҡыҙыҡ күреп, ағас төпһәһенә яҡын килдем. Ослаңған ҡәләм кеүек ине ул. Теш юлы уның ныҡ үткер булыуын күрһәтә ине. Уҫаҡтарҙы йыҡҡандар, ә ни өсөн турап алып китмәгәндәр? Асыҡлай алманыҡ - ҡайтып киттек.

Икенсе йылына килгәндә лә уҫаҡтар шул көйө ята ине. Йыуан яғы кибеп бөткән, ә канал эсендәгеһе - һыу. Бушҡа, бер файҙаһыҙға йығылмағандарҙыр был ағастар, сере нимәлә? Тағы бер нәмә: йығылған ағас төпһәһенән өҙөлмәгән, ни өсөн? Күрәһең, һыу эсенә йығылған оҙон, тарбағай ағастың бурысы - яҙғы ташҡын һыу баҫымының көсөн кәметеү, быуаны һаҡлауҙыр. Яр ситендә улар әллә ни күп йөрөмәгән. Баһрау йыуанлыҡ бер нисә уҫаҡты йығып, тулыһынса алып киткәндәр, улар өй төҙөү өсөн материал булғандыр.

Яҙғыһын мул һыулы Шүлгән йылғаһы эҫе йәй еткәс, ауылға етәрәк, ҡорой. Көҙгә оҙайлы ямғырҙарға тиклем ҡоро йырҙа ята. Ул ғына ла түгел: һуңғы йылдарҙа ауылдан биш километр самаһы үрҙәрәк тә йылға ҡорой башланы. Замана ауырыуы был. Ағастар күпләп ҡырҡылғас, шишмәләр ҡорой, ҙур йылғалар һайыға. Һәр ерҙә лә шул уҡ афәт: һыу етмәй хәҙер. Шуға ла бит ҙур сығымдарға ҡарамаҫтан, Ағиҙелде быуып ҡуйҙылар.

Ошо ҡондоҙҙар быуа быуып, һыу запаслап, бәлки, йылғаны ҡороп бөтөүҙән ҡотҡарыр: быуала һыу самалап ҡына ағыҙыла бит. Ҡондоҙҙар ишәйеп китеп, быуалар күбәйһә, йылғаның хәле бермә-бер яҡшырыр ине. Легендар Йылҡысыҡҡан күле ошо йылғанан туйына бит. Шүлгән йылғаһы ҡороһа, күл ни хәлдә ҡалыр? Күл урынына ҙур ҡоро соҡор өңөрәйеп ятһа, ни матурлығы булыр? Күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын, оло фажиғә бит был. Киләсәк быуындар ни күрер?

Үткән быуаттың алтмышынсы йылдарында күл тирәһе йырып сыҡҡыһыҙ әрәмә ине. Әкиәт донъяһына ингән кеүек, күлгә барыу шомло, ә үҙе серле ине. Хәҙер күмәк мал һәм кеше ҡулы күл соҡорона тиклемге элекке ҡуйы шырлыҡты юҡ итте. Күл ярына машина менән баралар. Серлелек бөткәс, ғәҙәти бер һыулы соҡор, ә инде һыуы ла ҡороһа...

Шуға ла ошо ҡондоҙҙарға рәхмәт уҡырға ғына ҡала. Нисек тә булһа, уларҙы һаҡларға, теймәҫкә, бимазаламаҫҡа кәрәк.

Йәй еткәс, тағы ла ҡондоҙҙарҙы күрергә барырға хыялланабыҙ. Өҫтәге ҡондоҙҙарҙың донъяһы үҙгәрҙеме, йәш ғаиләнең быуаһы нисек килеп сыҡты икән, ҡыҙыҡ. Түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ. Ишәйеп киткән бүреләр тейеп ҡуймаһын, насар уйлы кешеләр хилафлыҡ ҡылмаһын - бөтә теләк шул. Урман, тәбиғәт йәме булып, кешеләрҙе ҡыуандырып йәшәй бирһендәр. Ә беҙ ҡыш буйы йәйҙе һағынып көтөрбөҙ. Барыр мәл еткәс, шым ғына тау битләүенә килеп ултырырбыҙ ҙа, ҡоштар тауышын тыңлай-тыңлай, хозур ҡондоҙ донъяһын күҙ менән иркәләп, тәрән уйға сумырбыҙ.

**Рауил АЙСЫҒОЛОВ.**
**Бөрйән районы**
**Ғәҙелгәрәй ауылы.**
**(Аҙағы. Башы 3-4-се һандарҙа).**

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

**Был аҙнала Башҡортостанда көн үҙгәгендә суcҡа киҙеүе мәсьәләһе торҙо. Камчаткала уға бәйле карантин режимы индерелгән, ә Санкт-Петербургта ҡурҡыныс диагноз йөҙҙән ашыу кешегә ҡуйылған. Бынан тыш, суcҡа киҙеүе осраҡтары Һарытау, Ырымбур, Калуга, Иваново өлкәләрендә теркәлгән. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда бындай диагноз 34 кешегә ҡуйылған һәм улар дауаханаға һалынған. Өфөнөң бар мәктәптәре лә 6 февралгә тиклем карантинға ябылды. Белгестәр фаразлауынса, сирҙең февраль-мартта ҡотороуы ихтимал.**

# СУСҠА КИҘЕҮЕ...

## Үҙ аллы дауаланмағыҙ!



Ә нимә һуң ул суcҡа киҙеүе һәм ул ғәҙәти киҙеүҙән нисек айырыла? "А (H1N1) 2009) киҙеүенең симптомдары: тән температураһының юғары күтәрелеүе, йүтәл, тымау, тамаҡ, баш ауыртыуы, йыш тын алыу, мускулдар ауыртыуы, конъюнктивит. Ғәҙәттәге киҙеүҙән ул мускулдар ауыртыуы һәм конъюнктивит менән айырыла. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан белдереүҙәренсә, суcҡа киҙеүе өҙлөгөүҙәрҙен иртә барлыҡҡа килеүе, улар араһында вируслы пневмония лидерҙар рәтендә тороуы менән дә хәүефле. Вируслы пневмония ваҡытында хәл бик тиҙ ҡатмарлаша, 24 сәғәт эсендә тын етмәй башлай һәм кисекмәҫтән сирлегә респиратор ярҙамы йәки үпкәләргә механик вентиляциялау талап ителә. Шуға күрә беренсе симптомдар күренеү менән үҙаллы дауаланмаҫҡа, ә мотлаҡ табип саҡыртырға кәрәк.

Профилактика маҡсатында кеше күп йөрөгән урындарҙа булмау, даими рәүештә ҡулдарҙы һабынлап йыуыу, медицина битлеге бәйләп йөрөү зарур. Сөнки БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының йоғошло ауырыуҙар буйынса баш белгесе Дамир Вәлишин белдереүенсә, вирус һауатамсы юлы аша, йәғни сөскөрөү, йүткереү, һөйләшеү аша йоға.

Ә бына "Газета.ру" гәзите, киҙеү тураһындағы grippozus.ru проекты авторы, табип-терапевт Павел Шкутко менән әңгәмәләшеп, түбәндәгеләрҙе асыҡлай. Баҡтиһаң, быйылғы аномалия шунан ғибәрәт икән: ғәҙәттә, суcҡа киҙеүе мартта килһә, быйыл ул "ашыҡҡан". Һөҙөмтәлә Рәсәй табиптары ваҡиғаларҙың бындай боролош алырына әҙер булмай сыҡҡан һәм, хатта, вакцинация ла үткәреп өлгөрмәгән. Ғәҙәти киҙеү менән сағыштырғанда, суcҡа киҙеүенең үҙенсәлеге шунда: ул тәү сиратта 25 - 40 йәштәрҙәге граждандарға һөжүм итә. Ә ғәҙәти киҙеү, киреһенсә, иммунитеттары ҡаҡшаған һәм әле формалашып бөтмәгән балалар өсөн хәүеф сығанағы булып тора. Икенсе яҡтан ҡарағанда, әгәр суcҡа киҙеүен организм тулыһынса еңә икән, ул эҙемтәһеҙ үтә. Уның организмға кире йоғонтоһо башҡа сирҙәр менән бер үк ваҡытта күҙәтелгәндә генә булыуы мөмкин. "Рәсми медицина һәр ваҡыт киҙеүгә ҡаршы вакцинация үтергә кәңәш итһә, мин шәхсән быға ҡаршы, - ти Павел Шкутко. - Бактериаль инфекциялар өсөн вакцина һәр саҡ һөҙөмтәле эшләй, ә киҙеүгә килгәндә, вакцина иҫке штаммдар нигеҙендә яһала һәм беҙҙә һаман да былтырғы вакцинаны ҡаҙайҙар, ә киҙеү ошо ваҡыт эсендә мутацияланыуы ихтимал. Шуны ныҡлы белдерә алам: вакцина эшләткәндән һуң кеше ауырый икән, вакцина шул осраҡта ғына яҡшы эшләй. Организм уға ултыртылған көсһеҙ вирусты еңергә тейеш, һөҙөмтәлә иммунитет барлыҡҡа килә. Бер тапҡыр киҙеүҙе үткәргән кеше киләсәктә бер ваҡытта ла уның менән ауырымаясаҡ. Мин иммунитетты дөйөм нығытыу яҡлы. Табип буларак, шуны белдерә алам: прививка эшләткәндәр ҙә, эшләтмәгәндәр ҙә бер кимәлдә ауырый".

Ә инде "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмөндә ҡатнашыусы табибә Әлфиә Алтынбаева үҙенең шундай кәңәштәрен бирә:

"Эпидемия ваҡытында танау эсенә оксолин майын һөртөү, бүлмәләрҙе елләтеү, витаминға бай аҙыҡтар менән туҡланыу, көн режимын дөрөҫ күҙәтеү кеүек профилактика саралары үткәреү мөһим. Шулай уҡ эпидемияға тиклем эхинацея, С витамины, поливитаминдар эсеү файҙалы булыр. Ә иммуномодуляторҙарҙы табип ҡына тәҡдим итә ала. Аспирин эсеү ҡәтғи тыйыла".

**З. ӘЙЛЕ әҙерләне.**

---

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

### НӘФСЕ

40. Көслө теләк. Енси теләк. Шәһүәт. Көслө теләккә енси теләк, хакимлыҡ статусын күтәреүгә, байлыҡты арттырыуға ынтылыш инә. Руми, көслө теләккә ҡаршы интеллект тора, тигән. Көслө теләккә көрәү, ишетеү, тойоу ағзалары булышлыҡ итә. Тик Аллаһы Тәғәләгә тулыһынса буйһонған кеше генә көслө теләгән еңә ала.

41. Нәфсе өҫтөнән контроль. "Кешеләрҙе енгән көслө түгел, үҙ нәфсеһен енгән көслө", тип әйтелә бер хәҙистә. "Нәфсеһенә баш була алмаған - уға, нәфсеһен еңә алған кешеләргә хеҙмәт итә", тиелә икенсе бер хәҙистә.

42. Нәфсенең юҡҡа сығыуы. Илаһилыҡ булмышында йәшәгән генә нәфсенең мәғәнәһеҙлеген аңлай.

43. Нәфсегә ҡаршы тороу. Нәфсене тәрбиәләүҙең бер ысулы - уның теләктәренә ҡаршы тороу. Әгәр ҙә беҙ ҡаршы тороу ысулын һайлайбыҙ икән, нәфсегә башҡа нәмәне ҡаршы ҡуйырға ярамай, сөнки ул башҡа нәмә үҙе лә нәфсе булып, кире үҙенә әйләнеп ҡайтасаҡ. "Әгәр ҙә һин һәр осраҡта, һәр ваҡиғала хатта һинең өсөн рөхсәт ителгән нәфсеңде тыймаһаң, уны тәңкитләмәһәң, ул һине һәр саҡ алдатып йөрөтәсәк. Әгәр ҙә һин нәфсеңә риза булһаң, һәләк буласаҡһың", тигән Әбү Хафс Хаддад.

44. Нәфсе менән һуғыш. Суфыйҙар лөғәтендә "мөжәһит" һүҙе "нәфсе менән һуғыш" тигәнде аңлата. Суфыйсылыҡ юлына баҫыусы кеше үҙ нәфсеһе менән һуғыш юлын үтергә бурыслы. "Нәфсегә ҡаршы һуғышыусы яугир Аллаһы Тәғәлә өсөн һуғышыусы, иң бөйөк һуғыш - нәфсегә ҡаршы һуғыш", ти Мөхәммәт бәйғәмбәр. Ер йөҙөндәге кешеләр үҙ нәфселәренә ҡаршы һуғыш асып, уны еңеп сыҡһа, һуғыштар бөтөнләй юҡҡа сығыр ине, тиҙәр суфыйҙар. Сахл ибн Әбдиллах Тостари нәфсе менән һуғышты рухи һуғышҡа тиңләй, " Рухи һуғыш - Аллаһы Тәғәлә танытмаһын алыу", ти. Ибраһим Әҙһәм "Кеше алты ҡағиҙәне теүәл үтәһә генә изгелек баҫҡысына етә, ти:

- муллыҡтан ҡәнәғәтлек эҙләмә, ә үҙ-үҙеңә талапсан бул;
- үҙең хаҡында яҡшы уйлама, ә үҙеңде башҡаларҙан түбән ҡуй;
- үҙеңде бер ниндәй ихтыяжһыҙ йәшәйем, тип уйлама, һәр саҡ мохтажлыҡ той;
- туйып кикермә, ас йөрө;
- йоҡлама, һәр саҡ уяу бул;
- мәңге йәшәйем, тип өмөтләнмә, үлемеңә әҙерлән.

Рухи һуғыш нәфсе өсөн ҡулай булған ҡылыҡтарҙан баш тартыуҙы аңлата. Дәрт атың сығынлаһа, тыйыу теҙгененде ҡаты тот.

**(Дауамы бар).**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Өсөнсө сер

**Үҙбаһаһы түбән булған кешенең киң таралған шундай ғәҙәттәре бар:**

**Ғәйепләү һәм зарланыу.** Башҡаларҙы ғәйепләйбеҙ һәм уларға зарланабыҙ, сөнки бөтөн булған ваҡиғалар өсөн яуаплылыҡты үҙебеҙгә алырға теләмәйбеҙ. "Ғәйеп үҙемдә", "Минә үҙгәрергә кәрәк", тип әйтеүгә ҡарағанда, кемделер ғәйепләү еңелерәк. Һәр ваҡыт зарланған, үҙенең уңышһыҙлыҡтарында кемделер ғәйепләгән кеше үҙен кәм тоя һәм башҡаларҙы ғәйепләп, үҙен-үҙе үҫтерергә тырыша.

**Бәйләнсеклек.** Беҙҙең ҡиммәттәр системаһын ҡабул итмәгән йәки уға тап килмәгән өсөн тирә-яҡтағыларға бәйләнәбеҙ. Кәмселегебеҙҙе, үҙебеҙҙе хаҡлы, ә башҡаларҙы хаҡлы түгел тип күҙалларға тырышып, компенсациялайбыҙ. Шуға иғтибар итегеҙ: бик йыш башҡалар беҙгә үҙебеҙҙә оҡшамаған сифаттарҙы күрһәтеү менән ҡәнәғәт түгелбеҙ. Башҡаларҙың ғәмәлдәрен тәнҡитләгәндә, уларға: "Мин үҙемде тап шуның өсөн яратмайым, шуға күрә был да һеҙҙең өсөн эҙһеҙ үтмәйәсәк", - тигән кеүекбеҙ. Психология күҙлегенән ҡарағанда, был дөрөҫ тә - башҡаларҙа тап үҙебеҙҙә булған етешһеҙлектәрҙе йәки йомшаҡлыҡтарҙы яратмайбыҙ.

**Иғтибарға һәм хуплауға мохтажлыҡ.** Күптәр иғтибар һәм хуплау алыу ихтыяжы менән йәшәй. Улар ҡаҙаныштарын таный, ләкин үҙҙәрен лайыҡлы баһалай белмәй. Ундайҙарға даими рәүештә барыһы ла яҡшы, тирә-яҡтағылар ҙа уларҙы ҡабул итә һәм хуплай икәнен раҫлап торорға кәрәк.

**Яҡын дуҫтар булмауы.** Түбән үҙбаһалы кешеләрҙең, ҡағиҙә буларак, яҡын дуҫтары булмай. Сөнки улар үҙҙәрен яратмай, йәиһә, кешеләрҙән ситләшеп, "яңғыҙ бүре" булып йөрөйҙәр, агрессия, тәкәбберлек күрһәтәләр, тәнҡит яраталар һәм талапсандар. Был сифаттарҙың береһе генә лә яҡын мөнәсәбәттәр булдырыуға ҡамасаулай.

**Енеү ихтыяжы өҫтөнлөгө.** Әгәр кеше менән һәр саҡ еңеүсе булыу йәки һәр саҡ хаҡлы булыу теләге идара итә икән, был башҡалар алдында үҙенде күрһәтергә тырышыуға килтерә. Быны ҡаҙаныштарыбыҙ аша күрһәтергә тырышабыҙ. Был осраҡта беҙҙең менән маҡтау һәм хуплау алырға тырышыу ихтыяжы идара итә. Икенсе төрлө әйткәндә, төп дәлил - нимәлә булһа ла башҡаларҙан яҡшыраҡ булыу.

**Үҙеңдең йомшаҡ яҡтарыңа ирек биреү.** Үҙҙәрен яратмауҙары арҡаһында үҙ-үҙҙәре менән килешеп йәшәй алмаусылар, ғәҙәттә, ихтыяждарын башҡа нәмә менән тулыландырырға тырыша. Ситләтелгән, кәмһетелгән итеп тойоп, улар ошо "ауыртыуҙы" аҡыл һәм физик "наркотиктар" ярҙамында баҫтырырға тырыша. Ваҡытлыса ғына ҡәнәғәтлек алыр өсөн булһа ла дарыуҙар ашай, эсә, тарта. Шулай итеп, ауыртыуҙы аҙға ғына булһа ла баҫып тора. Йомшаҡлыҡты саманан тыш иркәләп тороу үҙеңде шәхес буларак ҡабул итмәүҙән килә. Ул ысынбарлыҡ менән осрашыуҙы һәм тормошто үҙгәртергә кәрәк тигән ихтыяждың үҫеүен кисектереү мөмкинлеген бирә.

**Депрессия.** Беҙгә бәйле булмаған нимәләр ҡамасаулаған өсөн теләгән нәмәгә өлгәшә алмайбыҙ тип иҫәпләйбеҙ һәм шуға ла депрессияға бирелә-беҙ, үҙебеҙгә ышанысты юғалтабыҙ. Үҙебеҙҙең һәм тирә-яҡтағыларҙың стандарттарына ярашлы йәшәргә тырышыу һөҙөмтәһендә күңел ҡайтыу, ҡурҡыу үҙбаһаның түбәнәйеүенә килтерә.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Кеше ғашиҡ булғанда үҙ-үҙен алдауҙан башлай, шунан башҡаларҙы алдау менән тамамлап ҡуя.*

*(Оскар Уайльд).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ




**Вәсилә ӘБДРӘХИМОВА төҙөнө.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Февраль (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (22) дүшәмбе | 7:39 | 9:09 | 13:30 | 16:20 | 17:50 | 19:20 |
| 2 (23) шишәмбе | 7:37 | 9:07 | 13:30 | 16:22 | 17:52 | 19:22 |
| 3 (24) шаршамбы | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 16:24 | 17:54 | 19:24 |
| 4 (25) кесе йома | 7:34 | 9:04 | 13:30 | 16:26 | 17:56 | 19:26 |
| 5 (26) йома | 7:32 | 9:02 | 13:30 | 16:28 | 17:58 | 19:28 |
| 6 (27) шәмбе | 7:30 | 9:00 | 13:30 | 16:31 | 18:01 | 19:31 |
| 7 (28) йәкшәмбе | 7:28 | 8:58 | 13:30 | 16:33 | 18:03 | 19:33 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

**4-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Уяныу. Урамына. Адамович. Ғәйбәт. Атына. Твен. Әҙәмде. Игеү. Оло-ларҙар. Ҡәлб. Ефет. Ағас. Донник. Тыва. Иваси. Григ. Түш. Асаев. Бала. Ғәниева.

**Вертикаль буйынса:** Акробат. Айыҫҡолов. Арбаға. Улым. Ромб. Опто. Ялалов. Сигнал. Ире. Сари. Чинуг. Алма. Уйнай. Ғәләүетдинова. Ҡанат. Бром. Тимербикә.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ғинуар айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Әбйәлил районы** Яңы Балапан ауылынан Рита Шәйҙуллина, Йәнгел ауылынан Фәрхизә Саниева, Хәлил ауылынан Гөлшат Ғәлимшина, Юлдаш ауылынан Рәсилә Баймырҙина, Салауат ауылынан Әлиә Ибраһимова, **Өфө ҡалаһынан** Гөлсинә Мостаева, Рәфисә Буранбаева, Альмира Исханова, **Салауат ҡалаһынан** Тәғзимә Батыршина, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Фәриҙә Мөхәмәҙуллина, **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Әминә Әҙелғужина, Родина ауылынан Фәүзиә Ҡотлогилдина, **Баймаҡ районы** Аҡтау ауылынан Фәүзиә Иҫәндәүләтова, Таһир ауылынан Сәлих Күҙебаев, Зөлфирә Тулыбаева, I Этҡол ауылынан Сәмиғә Хисмәтуллина, Бәхтегәрәй ауылынан Вәхит Ғайсаров, **Баймаҡ ҡалаһынан** Руфина Зөлҡәрнәева, **Бөрйән районы** Ҡурғашлы ауылынан Әмин Фәсхетдинов, **Әлшәй районы** Ҡармыш ауылынан Миңлейән Ғәбделмәновты һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! "Киске Өфө"гә оҙаҡ йылдар тоғро ҡала белгән дуҫтарыбыҙға, тормошоғоҙ тик һөйөнөстәрҙән торһон, тип теләйбеҙ. Ҡайғы-хәсрәт елдәре урап үтһен, ғаиләләрегеҙ имен булһын, Хоҙай Тәғәлә ныҡлы сәләмәтлек насип итһен!

* * *

Беҙ үҙебеҙҙең фәһемле фекерле, уйлы, ғәмле, битараф булмаған авторҙарыбыҙ менән бәхетле, тип әйтә киләбеҙ. Улар күп тә түгел, ләкин берәгәйле. Шундай авторҙарыбыҙҙың икәүһе - Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе **Урал Мостафин** һәм Әбйәлил районы Асҡар ауылында йәшәүсе **Рәхимә Мусина** ошо көндәрҙә үҙҙәренең күркәм юбилейҙарын билдәләй. Ихлас ҡотлайбыҙ уларҙы! Уларға киләсәктә лә Ижад ғәле йәнәптәренән айырылмайынса, ҡомарланып, илһамланып ижад итеүҙәрен, ә был мәлдә уларҙың йәнәшендә, йән һәм тән һағында Һаулыҡ, Байлыҡ, Мөхәббәт, Изгелек кенә булыуын теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән,**
**"Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**31 ғинуар "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия
**3 февраль "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.)
**4 февраль "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма
**5 февраль "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**31 ғинуар "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00
**2 февраль "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г. Зәйнәшева), комедия
**3 февраль "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия
**4 февраль "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 10.00, 12.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**3 февраль "Китмәҫкә килгән ҡошом"** (Э. Йәһүҙин), комедия
**5 февраль "Гонаһлы хыялдарым"** (Ф. Ғәлимов), комедия

*Кеше яманатын һатҡансы, үҙеңдең яҡшатыңды тап.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



АФАРИН!

# БАЛАЛАРЫҒЫҘ...

## туған мөхитендә үҫһен



**"Башҡортостан" дәүләт концерт залында балалар өсөн башҡорт театр студияһы эшләй башлаясаҡ. Уны Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты Хөрмәтулла Үтәшев етәкләйәсәк.**

- Бала саҡта кеше бар яңылыҡты ла яҡшыраҡ ҡабул итә һәм бар нәмәгә лә тиҙерәк өйрәнә. Хатта психологтар ҙа балалар өсөн театр мәктәбе кәрәк, тигән фекерҙә, был уларҙы оло тормошҡа яҡшыраҡ әҙерләй. Унан һуң, баш ҡалабыҙҙа башҡорт театр студиялары юҡ кимәлендә. Балаларыбыҙ өсөн милли мөхитте тағы ла бер аҙ киңәйтәсәкбеҙ, улар бер урынға йыйылып, бер-береһе менән таныша, аралаша аласаҡ. Был турала мин күп уйландым һәм БР Мәҙәниәт министрлығына ошондай тәҡдим менән мөрәжәғәт иттем. Ул ваҡытта "Башҡортостан" дәүләт концерт залында реконструкция бара ине, шуға студияға урын биреү мәсьәләһе хәл ителмәйерәк торҙо. Хәҙер инде боҙ ҡуҙғалды, беҙ студия асыуыбыҙ тураһында иғлан иттек һәм 15 февраль көнө киске алтыла йәш дуҫтарыбыҙ һәм уларҙың ата-әсәләре менән тәүге осрашыу буласаҡ. Был турала тулыраҡ мәғлүмәт "Бәйләнештә" сайтында бар. Башҡорт студияһының нимә менән шөғөлләнәсәген шунда асыҡ күрергә буласаҡ, - ти Хөрмәтулла Ғаззали улы.

Студияның төп маҡсаттарының береһе - баланы театр сәнғәте аша үҫтереү. Был маҡсатты тормошҡа ашырғанда бер үк ваҡытта туған телде һаҡлау, киләсәктә башҡорт театрҙары актерҙарына алмашҡа лайыҡлы йәштәр тәрбиәләү кеүек мөһим мәсьәләләр ҙә үҙенән-үҙе сиселәсәк. Һәр хәлдә, башҡорт театрҙарының тоғро тамашасыһы ла артасаҡ. Ысынлап та, бала үҙ милли мөхитендә тулыраҡ асыла, быны миҫалдары күп, шул уҡ "Тамыр" студияһын ғына алып ҡарайыҡ. Ойоштороусылар фекеренсә, студияға йөрөгән балаларҙың да барыһы ла артист булып китмәйәсәк.

- Сәхнә тормошо уға кәрәкме-юҡмы — бер аҙҙан быны театр студияһына йөрөүсе бала үҙе лә тойомлаясаҡ, - тип дауам итә һүҙен Хөрмәт Ғаззали улы. - Әммә уларҙың һәр береһе үҙенең һәләттәрен асасаҡ, тиҫтерҙәре, тамашасылар алдында тартынмай үҙ фекерен белдерә аласаҡ. Тыуған илен, туған телен, милләтен хөрмәт иткән шәхес булып үҫһәләр, ниндәй генә һөнәр һайлаһалар ҙа юғалып ҡалмаясаҡтар. Балалар менән профессиональ белгестәр эшләр тип күҙаллана, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты уҡытыусыһы Рима Тәлғәт ҡыҙы Харисова дәрестәр бирәсәк. Башҡорт дәүләт академия драма театрының йәш артисы Фәнис Рәхмәтов сәхнә хәрәкәттәре, бейеү, сәхнә һуғыштары менән бер юлы ҡурайҙа ла өйрәтһә, тип уйлап торам.

Башлап ебәреүе еңелдән булмаҫ, шулай ҙа киләсәккә юғары маҡсаттар ҡуябыҙ. Башта бәләкәйерәк спектаклдәр сәхнәләштереһәк, һуңынан инде ҙурыраҡ әйберҙәргә тотонорбоҙ. Республикала балалар театрҙары бар, әммә уларҙы бер ҡорға йыйыусы фестиваль юҡ. Нығынып, аяҡҡа баҫып алһаҡ, фестивалдәр ойоштороусы булараҡ та сығыш яһай алырбыҙ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балағыҙ өсөн театр студияһы, тәү сиратта, уның үҙенә кәрәкле сифаттарҙы үҫтереү өсөн кәрәк, хөрмәтле атаәсәләр. Ул яуаплылыҡҡа ла өйрәнәсәк, иғтибары, хәтере яҡшырасаҡ. Тиҫтерҙәре менән рәхәтләнеп башҡортса һөйләшеп, үҙ-ара ярышып, сәмләнеп, һөнәрҙәргә өйрәнеп үҫәсәк. Башҡорт студияһында 7 йәштән 18 йәшкә тиклем теләге булған һәр кем шөғөлләнә аласаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ҺҮҘЛЕК

# БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Аймиләүшә, төн миләүшәһе** - вечерница
**Айыу ҡурайы, һаҫыҡ көпшә** - дягиль лекарственный
**Аҡ алабута** - марь белая
**Аҡ ҡандала үләне, аҡ донник** - донник белый
**Аҡ ҡондораҡ** - полевица белая
**Аҡ селек** - таволга городчатая
**Аҡ сәскә, һөйәр сәскә** - нивяник обыкновенный
**Актамыр, зәлеш** - пырей ползучий
**Аҡ томбойоҡ** - кувшинка белая
**Аҡ умырзая, яҙғы елбәгәй** - ветреница дубравная
**Аҡһыл күрән** - осока бледноватая
**Аҡһыл сырмалсыҡ** - чина бледноватая
**Аҡһырғаҡ** - чемерица обыкновенная, лобеля
**Аҡ шомбоя** - заразиха белая
**Аҡ шыршы** - пихта
**Аҡ әнис** - тмин
**Аҡ әрем** - полынь эстрагон
**Алабута** - лебеда
**Аласыҡ** - копеечник
**Ала миләүшә** - фиалка трехцветная, иван-да-марья
**Алмағас** - яблоня
**Алтей үләне** - алтей лекарственный
**Алтынбаш** - золотарник канадский
**Алтын ҡамсы** - золотарник, золотая розга
**Алтын тамыр** - золотой корень, радиола
**Алтын сәскә** - крестовик обыкновенный
**Алтын шарҙар** - золотые шары
**Алтын шөңгөр** - купальница
**Андыҙ** - девясил высокий
**Арпа** - ячмень
**Арса** - вереск обыкновенный
**Артыш** - можжевельник обыкновенный
**Арыҫлан ҡойроғо** - пустырник
**Арыҫлан ауыҙы** - львиный зев
**Арыҫлан тырнағы** - зюзник высокий
**Арыш** - рожь
**Арышбаш, бесәй ҡойроғо** - житняк
**Астра, йондоҙ сәскә** - астра
**Аҫ** - ячмень дикорастущий
**Ат борсағы** - бобы конские, обыкновенные
**Атҡолаҡ** - щавель конский
**Ауғана талы** - ива синеватая

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДУҪТАРЫҢ ҠАРҒА БУЛҺА...

## күҙең емтектә булыр

Дөрөҫлөк үҙе генә еңә алмағас, ярҙамға ялғанды саҡырған, ти.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ниндәйҙер теләгенде тормошҡа ашырыр алдынан уйла: ошондай уҡ теләкте тормошҡа ашырған башҡалар бәхетлеме?

**(Франсуа Ларошфуко).**

Кеше яманатын һатҡансы, үҙеңдең яҡшатыңды тап.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Егет бик ныҡ яратҡан ҡыҙын уға кейәүгә сығырға өндәй - йәғни фамилияһын үҙгәртергә, эшен ташлап, уға балалар тыуҙырырға, эштән ҡайтыуын көтөп, ашарына бешереп, өйҙә ултырырға, уның менән бер ерҙән икенсе ергә күсеп йөрөргә... Ҡыҙыҡ, әгәр ҙә егет ҡыҙҙы яратмаһа, унан ниҙәр талап итер ине икән?

**(Гейбриелл Бартон).**

Кеше ғашиҡ булғанда үҙ-үҙен алдауҙан башлай, шунан башҡаларҙы алдау менән тамамлап ҡуя.

**(Оскар Уайльд).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кешенең өйөнә Бәхет килә. Шатлығы эсенә һыймаған кеше өйөндә генә ултырып сыҙай алмай, Бәхете тураһында бар ғаләмгә белдерергә теләп, донъя ҡыҙырып сығып китә. "Минә Бәхет килде, Бәхет килде!" тип ҡысҡыра-ҡысҡыра йүгереп йөрөй-йөрөй ҙә, тынысланғас, тирә-яғын байҡап, Бәхетен эҙләй. Ләкин таба алмай. Хужаһы сабып йөрөгәндә, Бәхете артта тороп ҡала ла, аҙаша. Хәҙер инде был кеше үтелгән юлынан артҡа табан йүгерә, ләкин Бәхетен яңынан осрата алмай. Ул үҙенең ниндәй ҙур хата эшләгәнен аңлап, илай башлай.**

**Шул саҡ кеше эргәһенә бер аҡһаҡал килә һәм:**

**- Бәхетеңдән алда йүгерһәң, уның артта тороп ҡаласағын белмәнеңме ни?.. - ти. - Бәхетең менән йәнәш барырға, уның аҙымдары менән самалап атларға кәрәклеген, шул саҡта ғына ул һинән ҡалышмаясаҡ һәм юғалмаясаҡ икәнен белмәнеңме ни?.. Башыңа төшкән ҡайғы тураһында ҡысҡырырға мөмкин, ләкин шатлыҡты шым ғына кисереү кәрәк, сөнки донъяла көнсөл кешеләр бик күп. Кешеләрҙең башҡалар ҡайғыһына иҫе китмәй, сөнки ҡайғылар уларҙың үҙҙәрендә лә етерлек. Ә башҡалар шатлығы һәр саҡ кемдеңдер күҙен ҡыҙҙыра. Шатлыҡ, бәхет менән уртаҡлашыу йыш ҡына уларҙың юҡҡа сығыуына ла килтерә. Шуға ла, кемдәрҙер ишетһен һәм ярҙам итһен өсөн ҡайғыларың тураһында ҡысҡырырға була, ә быны алып китмәһендәр өсөн шатлыҡты шым кисерергә кәрәк...**

**Быны шунда ла шул йәшәйеш аҡылының асылы..."**


1582218 91006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 29 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.



«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 150/01